ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

11-17 сентябрь (һарысай) 2021

№37 (975)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Батып барыусыны ҡотҡарыу -** унын үҙ эшеме?



2-3

**Халыҡ менән дүрт сәғәт**



4

**Һәр бер архив - хазиналар утрауы,** унда быуаттар ауазы тауыш бирә



8-9

**Ҡурсаҡ театрында ғына...** ысын мөғжизә, ысын әкиәт йәшәй



11

**Һайлауҙар** 14-15

*Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле башланды. Шулай итеп, 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 1 сентябрҙән 731 һум 66 тин тәшкил итә. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.*

***Мөхәрририәт.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**"Өфөнөң 450 йыллығына пландарыбыҙ бар. Ләкин өфөләр менән кәңәш ҡормағанбыҙ әле. Беҙгә халыҡтың нимә теләгәнен аңларға, уларҙың фекерен иғтибар менән тыңларға кәрәк" ,- тине ошо көндәрҙә республика Башлығы Радий Хәбиров. Ошо уңайҙан һеҙ ни тиерһегеҙ?**

***Әлфәт ҠОБАҒОШОВ, рәссам, скульптор, Салауат Юлаев ордены кавалеры:*** Өфө ҡалаһы ниндәй булырға тейеш? Был турала, дөрөҫөн әйткәндә, 20-30 йыллап һөйләйбеҙ бит инде. Ваҡытында бик күп ҡиммәтле фекерҙәр, тәҡдимдәр булды, тик улар һаманға тиклем матур хыял булып ҡала килә. Һүҙ Өфөнөң Башҡортостаныбыҙ баш ҡалаһы икәнен күрһәтеп, әллә ҡайҙан күҙгә салынып торорға тейешле милли колориты тураһында бара. Бына, мәҫәлән, күҙҙе йомоп, Ҡаҙағстан, Үзбәкстан йә Эстонияға килеп төшкән хәлдә лә ошо төбәк ҡалаларының милли колоритына, архитектураһына, биҙәлешенә ҡарап та ҡайҙа, ниндәй ҡалала тороуыңды шәйләргә була. Өфө ҡалаһын, бер нисә иҫтәлекле урынынан башҡа, ҡумта шикелле зауыҡһыҙ бер иш йорттарына ҡарап, Рәсәйҙең башҡа ҡалаларынан айырыуы ауыр тип уйлайым.

Һуңғы йылдар беҙҙә, әлбиттә, бик күп төҙөлә, төҙөкләндереү эштәре йәнләнә, ләкин әлеге колорит тигән нәмә һәр ваҡыт проектлаусылар һәм ҡала архитекторҙарының күҙ уңынан төшөп ҡала килә. Мәҫәлән, бына Ағиҙел яры матур итеп төҙөкләндерелә, ул әле үк халыҡтың яратҡан ял урынына әүерелде. Ҡайҙа-ҡайҙа, бына шунда, ҡалабыҙға килеп ингән ҡапҡа булыр урында, был Башҡортостандың баш ҡалаһы, тип һүҙ һәм ошо хаҡта яҙыуҙар менән түгел, ә күҙгә күренеп торор милли биҙәктәр һәм башҡа билдәләр менән әйтеү кәрәк ине. Милли биҙәк, тигәндән, башҡорт орнаменты күренгеләй ул, уны ярҙың буйынан-буйына саҡрымдарға һуҙып та ҡуйырға мөмкин, ләкин ул ғына милли колорит тигәнде аңлатып еткермәй шул. Бында алдан уйланылған, сәнғәт белгестәре менән килешелгән тотош композицион проект булырға тейеш ине. Бик булмаһа, милли элементтар: ҡурай таҡыяһы, көмөш тәңкәләр, кәрәҙле орнаменттар менән биҙәү, тирмә рәүешендәге офис, кафе-ресторан һәм башҡа биналар төҙөп ултыртырға булыр ине.

Донъяуи кимәлдәге кешелек ҡиммәттәрен раҫлау хаҡына ғүмерен фиҙа ҡылған Урал батырыбыҙға һәйкәл һәм үлемһеҙ эпосыбыҙ буйынса арт-композициялар ҙа урын алырға тейешле баш ҡалабыҙҙа. Иң тәүҙә уның өсөн елле генә урын һайлау кәрәк. Салауат батырыбыҙ һәйкәле кеүек, алыҫтан күренеп, үҙенә саҡырып торорлоҡ булһын. Үкенескә, бындай монументаль һәйкәл өсөн хәҙер ҡалала урын табыуы ла ҡыйын, дөрөҫөн әйткәндә. Өфөбөҙгә аэропорт яғынан килгәндә алыҫтан күренеп торорлоҡ ерҙәр, тау битләүҙәре ниндәйҙер бизнес-офис биналары менән тулды, ә улар әллә ни оригиналлеге менән айырылып тормай. Исмаһам, ҡалаға килеп ингән урында архитектураһы менән иғтибарҙы йәлеп итерлек биналар булһа икән дә...

## УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ТӘНҠИТЕ ЛӘ, МАҠТАУЫ ЛА УРЫНЛЫ

**Беҙ бала саҡта гәзит иң төп мәғлүмәт сығанағы булды. Нәҡ гәзит биттәренән илдәге яңылыҡтарҙы белә инек. Ошо тәртип күңелгә ныҡ һеңеп ҡалған һәм әле булһын ҡағыҙға баҫылған мәғлүмәт минең өсөн интернет, радио һәм телевизорға ҡарағанда ышаныслыраҡ, яҡыныраҡ, мөһимерәк күренә. Шуға күрә өйөбөҙгә тиҫтәләгән гәзит-журнал яҙҙырам һәм уларҙың һәр береһен ентекләп уҡып барам.**

Шулар араһында "Киске Өфө"нө айырыуса билдәләп үткем килә. Гәзит рәсми мәғлүмәти сығанаҡ булыу менән бер рәттән, киң мәғәнәле, төплө, төрлө быуынға ла ҡыҙыҡлы булырҙай мәҡәләләре менән абруйлы. Шулай уҡ минә уның беренсе битенән үк көнүҙәк мәсьәләләрҙең асыҡ һәм аныҡ аңлатмалар менән бирелеүе айырыуса оҡшай. Бер үк теманы төрлө кеше фекере аша асып, ул мәсьәләне киң даирәлә ҡарау мөмкинлеге бирә гәзит.

Мәктәп тормошон киң яҡтыртыуы, уҡытыусылар менән тығыҙ бәйләнештә эшләүе лә "Киске Өфө"нөң мәртәбәле бер үҙенсәлеге. Ғөмүмән, тәрбиә, ғаилә, ата-әсә һәм балалар араһындағы мөнәсәбәт тураһында ла күп баҫтыра гәзит һәм был тик маҡтауға лайыҡ. Тарих темаһына ҙур урын биреүе, арҙаҡлы шәхестәрбеҙ тураһында яҙыуы, шулай уҡ йәштәр тормошон күҙ уңынан ысҡындырмайынса үҙ уҡыусыларына еткерә барыуын юғары баһалайым.

"Киске Өфө" журналистары хәл итәһе мәсьәләләрҙе киң йәмәғәт иғтибарына әүҙем сығара, урынлы ғына итеп тәнҡит "утына" тота белә, маҡтағанда ла артыҡ мауығып китмәй, саманан арттырмайынса ғына халыҡ иғтибарына еткерә белә. Төрлө һорауҙарҙы хәл итеү юлын да бер яҡлы ғына сағылдырмай, бер позициянан ҡарап ҡына эш итмәй гәзит, ә бөтә яҡты ла тыңлай, аңлай белә.

Сканвордттарҙы яратып сисәм. Улар минә халҡым, телем, мәҙәниәтем, тарихым һәм бөгөнгөм тураһында булған белемемде тикшерергә ярҙам итә, зиһенде асып ебәрә.

**Сәлих ӘКРӘМОВ.**
**Әбйәлил районы.**




12+

*✓ Мәскәүҙә пассажирҙарҙың килеп туҡтаған автобусҡа тыныс ҡына сират буйынса инеүҙәрен күреп, аптырап ҡайтҡаным булды. Мәҙәнилек бына шунда күренә лә инде, ә беҙҙең Өфө халҡының тәрбиәһеҙлегенә тағы бер аптырарлыҡ.*



УЙЛЫҒА - УЙ

# СЫЛБЫРҘАЙ ТЕҘЕЛЕП, ҠАЙТЫҒЫҘ...



**Гәзитебеҙ авторҙары араһында илһөйәрлек, туған телебеҙ, динебеҙ мәсьәләләрен күтәреүселәрҙең күплеге һөйөндөрә. Ошо темаларға ҡағылышлы мәҡәләләргә айырыуса ныҡ иғтибар итеүсәнмен. Халҡы тормошона, милләтенә битараф булмаған шундай зыялыларыбыҙҙы хуплап ҡына ҡалмай, үҙем дә улар сафын тулыландырыуҙы оло бәхеткә һанайым. Ватан, тыуған ил хаҡында күпме генә яҡшы һүҙҙәр әйтһәң дә, һәр саҡ аҙ һымаҡ...**

Ер йөҙөндәге бар халыҡтың да үҙ ватаны бар, һәр кемгә тыуған иле ҡәҙерле. Илленсе, алтмышынсы йылғы яҡташтарыбыҙҙың күптәренең әле булһа хәтерендәлер: Төньяҡ халыҡтары вәкиле булған (милләте - нанаец) Кола Бельды исемле йырсы "Увезу тебя я в тундру" тигән бер йырҙы йырлай торғайны. Был йыр беҙҙең илдә (СССР-ҙа) хатта киң популярлыҡ яулап та алғайны. "...Мы поедем, мы помчимся на оленях утром ранним, и отчаянно ворвемся прямо в снежную зарю..." Ошо йырҙың эстәлегенә инә башлаһаң, ысынлап та, әлеге һыуыҡ яҡтан да матурыраҡ ер юҡ һымаҡ булып тойола башлай...

Бер мәл үҙем хәрби хеҙмәт иткән осорҙа ҡаҙаҡтарҙа аш мәжлесендә булырға тура килгәйне. Һөйләшеүгә ифрат алсаҡ булған был кешеләр шунда уҡ күңелемә ятты. Ҡыҙыҡ күреп, уларға башҡортса һүҙ ҡушҡылайым. Минең Башҡортостандан икәнемде белеп алғас, шунда уҡ Сибай ҡалаһын иҫләнеләр. Үҙҙәренең бер олатаһы элек оҙаҡ йылдар шунда йәшәгәнлеге һәм үҙ туғандарына ҡунаҡҡа ҡайтҡан мәлдәрендә илай-илай ошолай тип йырлағаны хаҡында һөйләнеләр:

Сибай, Сибай, Сибай таш арасында.
Жәс ғумерем үтте инде башҡорттар арасында...

Ә мин уларға яуап итеп, хәләл ефетемдең Зәйнитдин исемле олатаһының йәштән Ҡаҙағстанға китеп, ғаилә төҙөп, ярты быуат тирәһе шунда йәшәгәнлеге хаҡында һөйләнем. Оло ғына йәштә булыуына ҡарамаҫтан, моңло итеп йырлай ҙа торғайны. Башҡорт халыҡ йырҙарын ифрат оҫта итеп башҡарған был бабайҙың йырлағанын беҙгә ҡунаҡҡа килгән бер мәлендә видеотаҫмаға ла төшөрөп алдым. Тыуған яғын һағынып йырлаған йырҙары айырыуса иҫемдә ҡалған. "...Мендем турат биленә, киттем ҡаҙаҡ иленә. Ҡаҙаҡ ере - йәшел үлән, әллә ҡайтам, әллә үләм..." тип йырҙың аҙағын бүлә-бүлә һыҡтап, күҙ йәштәрен һөрткөләп алған мәлдәрен әлеге видиктан ҡараһаң, ҡыҙғаныс та булып китә. Ғүмер буйы илгә ҡайтып йәшәргә хыялланды ул, әммә йәш сағында ситтә башҡа милләт ҡыҙы менән тормош ҡороп, уның менән уртаҡ балалар үҫтергән был олатай ҡаҙаҡ ерендә ныҡлы тамыр йәйеп өлгөргән ине шул. Шунда вафат булып та ҡалды. Әлеге мәжлестәге ҡаҙаҡтар менән "Һәр кемдең тыуған ере ғәзиз", тип һөйләшеп алғаныбыҙ хәтеремдә.

Гәзитебеҙҙең тәүге битендәге "Әйт, тиһәгеҙ..." тип аталған рубрикала бәғзе бер ваҡыт диңгеҙ буйына йә сит илгә сәйәхәт хаҡында һүҙ ҡуҙғатылды. 29-сы һанда хатта үлер мәле еткән кешенең аҙ сәйәхәт иткәне өсөн үкенеүе хаҡында Марк Твендың әйткән һүҙҙәре лә иҫкә алынғайны. Һүҙемде тап ана шул сәйәхәткә ҡағылышлы мәсьәләгә бәйләп дауам итмәксемен. Мин хәрби табип булып хеҙмәт иткән дәүерҙә беҙҙең госпиталь поликлиникаһына офицерҙар өсөн йыл әйләнәһенә оборона министрлығына ҡараған ял йорттарына һәм шифаханаларға путевкалар бирелә торғайны. Беҙ, табиптар, уларҙы ял итергә, һаулығын төҙәтергә теләгән офицерҙарға өләшә инек.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*БЫНАҒАЙЫШ!*

# БАТЫП БАРЫУСЫНЫ ҠОТҠАРЫУ -

## унының үҙ эшеме?

**Рәсәй Иҫәп палатаһы ошо көндәрҙә РФ Пенсия фонды сығымдарын тикшереү һөҙөмтәләре буйынса отчетында шаҡ ҡатырғыс бер мәғлүмәт бирҙе: йәше буйынса пенсия алыусылар һаны кәмегән, ә фонд бюджеты сығымдары, киреһенсә, артҡан. Был ниндәй ғилләә?**

Ил хөкүмәте өсөн "артыҡ тамаҡ", "ек күремселәре" иҫәпләнгән пенсионерҙар һанының бер йыл эсендә бермә-бер кәмеүенән пенсия тәьминәте чиновниктары, ниһайәт, иркенерәк тын алып, ҡыуаныс кисерә торғандыр. Ни тиһәң дә, ҡарттар һанының кәмеүе пенсия реформаһының тәүге "емештәре" бит, тик улар өсөн был татлы емеш булһа ла, ябай халыҡ өсөн ул бик әсе, сөнки кәмеүсе категория араһында пандемия ҡорбандары ла, фәҡирлек сигендә йәшәп донъя ҡуйғандар ҙа етерлек.

Росстат хәбәр итеүенсә, 2020 йылдың июленән 2021 йылдың июленә тиклем бер йыл эсендә Рәсәйҙә пенсионерҙар һаны 1 млн 200 мең кешегә кәмегән. Пенсия реформаһының төп маҡсаты - пенсия алыусылар һанын кәметеү маҡсаты, шулай итеп, күҙ алдында бойомға ашырыла башланы. Тәүге "уңыштар" шул турала һөйләй. 2018 йылда Рәсәй Президенты пенсия йәшен кисектереү тураһында указ ҡабул иткән ваҡытта Рәсәйҙә пенсионерҙар һаны 43,5 млн ине һәм был 2010 йылдан алып илдә уларҙың һаны туҡтауһыҙ йылдан-йыл арта барған осор булды. Мәҫәлән, 2008 йылда барлығы 38,4 млн пенсионер булһа, был һан ун йылдан тағы 5 миллионға артып, әлеге 43,5 млн тәшкил иткәйне. Был хәл ил хөкүмәтендә оло хафа һәм

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***"Өфөнөң 450 йыллығына пландарыбыҙ бар. Ләкин өфөләр менән кәңәш ҡормағанбыҙ әле. Беҙгә халыҡтың нимә теләгәнен аңларға, уларҙың фекерен иғтибар менән тыңларға кәрәк" ,- тине ошо көндәрҙә республика Башлығы Радий Хәбиров. Ошо уңайҙан һеҙ ни тиерһегеҙ?***

***Ғәлимйән ИШБУЛДИН, пенсионер, Өфө ҡалаһы:*** Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығы республикабыҙ тормошонда тарихи әһәмиәттәге ваҡиға буласаҡ, уға әҙерлек сараларының федераль кимәлдә алып барылыуы үҙе үк был датаның мөһимлеген раҫлай. Республика Башлығы Радий Хәбиров әйтмешләй, юбилей ҡунаҡтар өсөн түгел, ә ҡала халҡы өсөн кәрәк. Шулай уҡ бөтөн Башҡортостан халҡы өсөн дә, тип өҫтәр инем. Юбилей төҙөлөштәре бик күп, уларҙың ҡайһылары былтыр-быйылдары уҡ башланғайны инде. Ҡала үҫергә, камиллашырға тейеш, һүҙ ҙә юҡ, ләкин Радий Хәбиров ғәҙел билдәләп китеүенсә, юбилейға әҙерлек - ул теге йәки был объекттар төҙөп ултыртыу ғына түгел. Ысынлап та, халыҡ өсөн тибеҙ икән, уға баш ҡалала йәшәүе уңайлы, хәүефһеҙ һәм заманса шарттар булыуы кәрәк. Үкенескә, ҡала халҡы был йәһәттән маҡтана алмай, сөнки Республика идара итеү үҙәгенә, ҡала һәм уның район хакимиәттәре, киң матбуғат саралары адрестарына яуған ялыуҙар, хаттар, үтенес һәм тәҡдимдәрҙән дә асыҡ күренә етешһеҙлектәр.

Өфө ҡалаһы тормошонда иң "ауыртҡан" темалар - юлдар һәм транспорт мәсьәләләре. Транспорт тигәндә, йәмәғәт транспортын да, шәхси автомобилдәрҙе лә күҙҙә тотам. Баш ҡала урамдарында бик йыш авариялар була, бер ғәйепһеҙ үҙ йомошо менән китеп барған йәйәүлеләр, бала-саға ғүмерҙәре өҙөлә. Ошо мәсьәләне ныҡлы контролгә алырға ине. Йәмәғәт транспорты буйынса ла тәртип юҡ, ҡайһы бер маршруттарҙа автобустар етешмәй, оҙаҡ көтөп торорға мәжбүр була кеше. Унан, ниһайәт, килеп туҡтаһа, һуңғы автобусҡа ташланғандай ҡылана пассажир: этештөртөш, ireш-талаш китә, эргәләрендәге инвалидты ла, ҡартҡоро, бала-сағаны ла күрмәмеш булалар. Башҡа ҡалаларҙа, Мәскәүҙә, мәҫәлән, пассажирҙарҙың килеп туҡтаған автобусҡа тыныс ҡына сират буйынса инеүҙәрен күреп, аптырап ҡайтҡаным булды. Мәҙәнилек бына шунда күренә лә инде, ә беҙҙең Өфө халҡының тәрбиәһеҙлегенә тағы бер аптырарлыҡ. Бында ла шундай тәртип индерергә ине. Хәйер, булмаҫ ул беҙҙекеләрҙән... Бында, күрәһең, баяғыса маршруттарҙа автобустарҙың етешмәүе лә сәбәпселер, ә бит Мәскәүҙә минут һайын килеп кенә тора автобустар, шуға ла тыныс ҡына сират торалар, улар белә: бер-ике минуттан барыбер ултырып китәсәктәр. Бына шулай, халыҡ әйтмешләй, бар - ярашτыра, юҡ - талаштыра, ахырыһы инде.

Ғөмүмән, транспортта ғына түгел, ҡалабыҙҙы таҙа тотоуҙа ла культура етмәй беҙҙә. Ниндәй генә социаль реклама элеп ҡуйылһа ла уға ыжлап биреүсе лә юҡ. Ә һулаған һауабыҙ? Быйыл, мәҫәлән, майҙан башлап көҙгә тиклем тип әйтерлек һаҫыҡ һауа һулап йәшәргә мәжбүр булдыҡ. Ҡыҫҡаһы, минең тәҡдим: 2024 йылға тиклем Өфөбөҙҙө "Аварияһыҙ, экологик таҙа ҡала" итеү өсөн кисекмәҫтән эш башларға! Ҡала халҡын да һәр ерҙә үҙҙәрен тотанаҡлы, тәртипле булырға, бер-береһенә ихтирамлы мөнәсәбәткә өйрәтергә кәрәк, тик бына нисек итеп - белмәйем...

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Оператив штабтың 10 сентябргә мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда коронавирустан 15 үлем осрағы теркәлгән. Йәмғеһе 1264 сирленең, шул иҫәптән 60 йәштән өлкәнерәк 1022 кешенең ғүмере өҙөлгән. Бер тәүлектә коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 304 осрағы асыҡланған. Бөтә осорҙа уларҙың һаны 60 071-гә еткән. Әлеге ваҡытта 695 пациент, шул иҫәптән 60 йәштән өлкәнерәк 449 кеше стационарҙа дауалана. Уларҙың 61-енең хәле ауыр, 13-ө үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Бер тәүлектә 135 дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓Өфөлә "Яҡташлыҡ көсө" форумы ойошторола. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров ҡул ҡуйған тейешле указ хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Форум Башҡортостанда тыуып үҫкәндәрҙең төбәк-ара бәйләнештәрҙе киңәйтеү, республиканың муниципаль берәмектәрҙе үҫтереү башланғыстарын берләштереүгә булышлыҡ итеү маҡсатында уҙғарыла. Форумды әҙерләү һәм уҙғарыу буйынса ойоштороу комитетын Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса урынбаҫары Урал Килсенбаев етәкләй.

✓Башҡортостанда киләһе йома, 17 сентябрь, мәктәп уҡыусылары өсөн ял көнө була, тип хәбәр итте республика етәксеһе Радий Хәбиров Хөкүмәттә уҙған оператив кәңәшмәлә. 17 сентябрь - Дәүләт Думаһына, өлкә думаһына һәм округ советтарына һайлауҙың беренсе көнө. Күп кенә һайлау участкалары тап белем биреү учреждениеларында урынлашҡан, тип билдәләне Радий Хәбиров. Был көндө республика уҡыусылары өсөн тәрбиәүи саралар ойошторола, тине мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин.

✓Башҡортостан Башлығы "Башнефть" компанияһын республика иҡтисады үҫешенең локомотивы тип атаны. Башҡортостан - нефть сеймалын эшкәртеү һәм нефть продукттары етештереү күләме буйынса илдә төп субъекттар иҫәбендә. Әйтәйек, дизель яғыулығы сығарыу буйынса Башҡортостан - беренсе; эшкәртеүгә ебәрелгән нефть (нефтте беренсел эшкәртеү), автомобиль бензины буйынса икенсе урынды биләй. Рәсәй нефтенең (шул иҫәптән газ конденсаты) 2,2 процентын сығарып, Рәсәй төбәктәре араһында 13-сө урында тора.

✓ *Эйе, бар ине заманында, беҙ уҡып йөрөгән йылдарҙа Ленин урамында матур бер "Ашхана", йәнәшәһендә "Сәйхана"... Унда инеп, башҡорт аш-һыуынан ауыҙ итеп, самауырҙы "йыҡҡанса" сәй эсеп, кинәнә ине халыҡ.*





борсолоу тыуҙырҙы: пенсия түләүҙә бюджет наҡыҫлығы арҡаһында ауырлыҡтар башланды. Шунлыҡтан, ул ваҡыттағы премьер Д. Медведев, финанс министры А. Силуанов, ул саҡтағы иҡтисад министры М. Орешкин менән стратегик проекттар үҙәге етәксеһе А. Кудрин, Үҙәк банк рәйесе Э. Нәбиуллина һәм башҡа ҡайһы бер чиновниктар ҡатнашлығында пенсия йәшен кисектереү реформаһы бойомға ашырыла.

Әлеге көндә пенсионерҙар һаны ҡырҡа кәмеүенең өс төрлө сәбәбе атала. Әйтеп кителеүенсә, тәүгеһе, әлбиттә, пенсия реформаһы. Был турала указ көсөнә ингәндән һуң хаҡлы ялға китергә тейешле өлкән йәштәгеләр эш урындарында тотҡарланырға мәжбүр булды һәм һөҙөмтәлә пенсия алыусылар һаны тәүге йылы уҡ 326 мең кешегә кәмене. Киләһе 2020 йылда иһә "артыҡ тамаҡтар" һаны 300 меңгә кәмергә тейеш тип көтөлһә лә, коронавирус арҡаһында яҡты донъя менән хушлашыусылар иҫәбе өҫтәлеп, был күрһәткес йөмгеһе ярты миллиондан (568 мең 700) артып китте. Бында коронавирусты ғына гәйепләү дөрөҫ булмаҫ: өсөнсө сәбәп - өлкән быуын вәкилдәренең фәҡирлек сигендә йәшәү шарттары ла үҙ эшен эшләне, ти эксперттар, сөнки аҙыҡ-түлеккә, дарыуҙарға, коммуналь хеҙмәттәргә хаҡтарҙың көндән-көн юғары үрләүе ҡарттарҙы аслы-туҡлы көн күрергә мәжбүр итте һәм улар араһында үлем кимәлен арттырҙы.

Шулай итеп, пенсия реформаһы үҙенең төп маҡсатына - пенсия алыусылар иҫәбен кәметеүгә ирешһә лә, был өлкән йәштәгеләрҙең тормош хәлен яҡшыртманы. Шуға күрә халыҡ мәнфәғәтен ҡуҙәтеүсе ҡайһы бер бик һирәк депутаттар пенсияны арттырыуҙың башҡа төрлө юлдарын эҙләй һәм ниндәй ҙә булһа тәҡдимдәре менән сығыш яһай башланы. Мәҫәлән, шундай эшмәкәрҙәрҙең иң әүҙеме РФ Дәүләт Думаһының "Ғәҙел Рәсәй - Хәҡиҡәт хаҡына" фракцияһы етәксеһе Сергей Миронов ҡаҙна ҡытлығын тулыландырыу маҡсатында "ил бюджеты менән пенсионерҙар араһында кәрәге теймәгән аралашсы" булараҡ, Рәсәй Пенсия фондын бөтөрөргә тәҡдим итте. Депутаттар ЛДПР етәксеһе Владимир Жириновский, Алексей Журавлев, Вера Ганзя һәм башҡалар ҙа был идеяны хуплап сыҡтылар. Ни өсөн тигәндә, ысынлап та, пенсионерҙар һаны кәмеүгә ҡарамаҫтан, РФ Иҫәп палатаһы тикшереүҙәре һөҙөмтәһендә Пенсия фондының сығымдары арта ғына бара икән. Бына парадокс, ләкин уның сере бөгөнгө тормошҡа хас ябай ғына: фонд чиновниктарына бер йыл эсендә эш хаҡы 17,8 процентҡа арттырылды һәм ул уртаса 78 меңдән айына 91 меңгә барып етте. Ә был фондтың тулайым сығымдары Иҫәп палатаһы мәғлүмәттәре буйынса 117,7 миллиардҡа барып баҫа, имеш. Фонд хеҙмәткәрҙәренә эш хаҡы сығымдарынан тыш, был ведомство үҙ ҡарамағындағы 2,3 млн кв.м. майҙан тәшкил иткән күсемһеҙ милекте тотоуға, ремонтҡа, эш буйынса кәрәкле тауарҙар, эш һәм хеҙмәттәр күрһәтеү буйынса мәғлүмәт-коммуникация технологиялары өсөн һәм ҡайһылар яңы ведомство биналары төҙөүгә сығымдар, йәғни Пенсия фондының эске, үҙ кәрәгенә сығымдары ҡабара ғына бара. Был ведомствоны бөтөрөү шуға ла бюджетты тулыландырыуға байтаҡ өҫтәмә булыр ине, ти ошо тәҡдим яҡлылар.

Ләкин, һәр ваҡыттағыса, халыҡҡа яҡшылыҡ теләгән тәҡдимдәр теләк булып ҡына ҡала шул, чиновниктар бюрократияһы иң тәүҙә үҙҙәренең "комфорт мөхите"н ҡайғырта, уның менән һис хушлашырға теләмәй. Ул ғына ла түгел, Пенсия фонды позицияһын артабан нығытыу сараһы күрелә: М.Топилин урынына яңы етәксе, иҡтисад фәндәре докторы Н.Кричевский тасуирлауынса,"тәжрибәле һәм прогрессив ҡарашлы" Андрей Кигимдың тәғәйенләнеүе лә ошо хаҡта һөйләй кеүек. Хөкүмәт премьеры Михаил Мишустин да уға социаль үсеш йүнәлешендә ҙур өмөттәр бағлай. Быға тиклем Социаль страховка фондын етәкләгән Кигим ошо ведомство менән РФ Пенсия фондын берләштереү һөҙөмтәһендә эште яңыса ойошторорға тейеш тип ҡарала. Әллә инде, ҡалыплашып өлгөргән системаның нигеҙе иҫкесә ҡала килә икән, уның етәкселәрен алыштырыуҙан ни фәтүә булыр икән? Өлкән йәштәге граждандар, ғүмерҙәре етһә, тағы ла көтөр, үҙгәреш өмөт итер, шулай итеп, 2030 йыл да килеп етер, һәм дәүләт, ниһайәт, еңел һулап, пенсия менән тәьмин итеү бурысын граждандарҙың үҙ елкәһенә күсерер тә ҡуйыр. Һәр хәлдә, эксперттарҙың тел төбөнән шул аңлашыла...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***"Өфөнөң 450 йыллығына пландарыбыҙ бар. Ләкин өфөләр менән кәңәш ҡормағанбыҙ әле. Беҙгә халыҡтың нимә теләгәнен аңларға, уларҙың фекерен иғтибар менән тыңларға кәрәк",- тине ошо көндәрҙә республика Башлығы Радий Хәбиров. Ошо уңайҙан һеҙ ни тиерһегеҙ?***

***Гөлсирә СӘЙФУЛЛИНА, уҡытыусы, Көйөргәҙе районы:*** Пандемиянан алда уҡ әле йәйге каникулда үҙемдең 7-се класҡа күскән уҡыусыларымды баш ҡалабыҙҙы күрһәтергә алып килдем. Өфөгә килеп төшкәс, сәфәребеҙҙе, әлбиттә, иң тәүҙә Салауат Юлаев һәйкәленән башланыҡ, фотоға төштөк, бейек ярҙан Ағиҙелгә ҡарап һоҡландыҡ. Артабанғы маршрутты йәйәү атлап барырға булдыҡ, сөнки юл ыңғайыбыҙҙа Башҡорт дәүләт университеты, М. Ғафури музейы, уның исемен йөрөтөүсе Башҡорт дәүләт академия драма театры, Республика йорто, медицина университеты, Милли музей һәм башҡа иҫтәлекле урындар теҙелеп киткән. Баш ҡалабыҙҙы ҡарап йөрөй торғас, ниһайәт, балалар асыҡты, уларҙы ҡайҙа ашатырға? Ауыл балаларының аҡсаһы ла һанаулы ғына, тимәк, беҙгә арзанырак булһа ла ярай, ләкин аҙым һайын кафе лә ресторан, ауыл балаһы ашҡаҙанына ят "Шаурма" ла "Бургер", етмәһә, шаурманы урамда тороп ашарға кәрәк, был матур күренеш түгел, өҫтәүенә, санитар талаптарға яуап бирмәй. "Макдоналдс" менән KFC-ларына ла инге килмәне, юлда йөрөүселәр өсөн бармай уларҙың ҡыҙҙырылған майлы ризыҡтары, хаҡтары ла үҙегеҙгә мәғлүмдер.

Бәхеткә, Ленин урамында элекке "Өфө" рестораны урынында асылған сәйерерәк атамалы "Ложки-вилки" тигән ашханаға туҡталдыҡ. Шул арала бер төпсәр ҡыҙыҡайым һорай ҙа һалды: "Ә нинә уға башҡортса исем ҡушмағандар? Был бит Башҡортостандың баш ҡалаһы!" Эйе, бар ине заманында, беҙ уҡып йөрөгән йылдарҙа Ленин урамында матур бер "Ашхана", йәнәшәһендә "Сәйхана"... Унда инеп, башҡорт аш-һыуынан ауыҙ итеп, самауырҙы "йыҡҡанса" сәй эсеп, кинәнә ине халыҡ, бигерәк тә баш ҡалаға әлеге беҙҙең кеүек райондарҙан юл-йомош менән йөрөүселәр. Аҙыҡ-түлек һәм икмәк магазиндарының кафетерийҙары эшләп торор ине, унда аяғөҫтә генә тороп ҡайнар сәй йә кофе алып, ауыҙҙа ирер торған ҡабартма (пончик), йә бутерброд менән тиҙ генә тамаҡ ялғап сығырға була ине. Уларҙың бөгөн эҙе лә юҡ, ә кафеларҙа бер стакан сәй хаҡы ғына 150-200 тәңкә тора, ғәрлек бит! Элекке кеүек бәләкәй генә сәйханалар асып булмай микән? Халыҡҡа уңайлыҡты түгел, төшөмлө килем ҡайғырталарҙыр инде ҙур һәм ҡиммәтле кафелар асып. Хатта бит "Пышка" кафелары ла өмөттө аҡламаны, унда милли аш-һыу төрҙәре бик аҙ, ризыҡ күбеһенсә арзанырак сусҡа ите һәм шуны ҡушып әҙерләнә һәм блюдо йә ярымфабрикаттары ҡиммәткә һатыла. Икенсенән, уның ашханаларында һәр ваҡыт сират, ашһыу сифатлы булған өсөн түгел, ә яҡынтирәлә башҡа ашханалар булмаған өсөн. Аҙыҡ-түлек магазиндары аҙым һайын, шуларҙың бер нисәһендә кафетерийҙар, шулай уҡ халыҡ күп йөрөгән урамдарҙың берәһендә махсус "Сәйхана" асылһа ине Өфөлә. Бындағы халыҡ сәйҙе эшкә һанамайҙыр ҙа, бәлки, ошоға тиклем быны талап итмәгәс, уның ҡарауы, райондан килгән юлаусыларға, аҡсаһы наҡыҫ студенттарға бик тә яйлы булыр ине.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Сентябрҙә яңы коронавирус инфекцияһы йоҡторғандар һаны бер аҙ кәмеүе күҙәтелә. Ләкин октябргә уҡ Башҡортостанда COVID-19-ҙың яңы тулҡыны башлана, тип раҫлай Асыҡ мәғлүмәттәр аналитигы Александр Драган. "Балалар - мәктәпкә, студенттар - юғары уҡыу йорттарына уҡырға бара, хеҙмәткәрҙәр офисҡа эшкә сыға. Быларҙың барыһы ла баҫыла башларға тейешле өсөнсө тулҡындың көсәйеүенә килтереүе мөмкин", - тине Драган.

✓Токиола уҙған Паралимпиадала Башҡортостан спортсылары биш алтын, өс көмөш һәм дүрт бронза миҙал яуланы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың спорт министры Руслан Хәбибовҡа миҙалдар яулаған спортсыларға тиҙ арала приз аҡсаһын түләүҙе ойошторорға ҡушты. Билдәле булыуынса, алтын миҙал яулаусыларға был сумма - 2 миллион һум, көмөшкә - 1,5 миллион, бронза миҙал өсөн 1 миллион тәшкил итә. Тренерҙарға сумманың яртыһы түләнә.

✓Рәсәй Гидрометеорология үҙәге етәксеһе Роман Вильфанд быйыл илдә йәйҙән көҙгә күсеүҙең айырыуса ныҡ һиҙеләсәген хәбәр итте. Сентябрҙең тәүге көндәрендә уҡ көҙгөсә һалҡынайтты. Гисметео порталы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда сентябрҙә көндөҙ +12, +19 градус, төндә иһә +6, +12 градус була. Вильфанд әйтеүенсә, һалҡын һауа торошо - "әбейҙәр сыуағы" хәбәрсеһе. Сентябрҙең икенсе яртыһында көндәрҙең йылытыуы ихтимал, тип билдәләнә ул.

✓Башҡортостан табиптарының күсмә бригадаһы 6 сентябрҙән Удмурт Республикаһының дауалау учреждениеларында эшкә тотондо. Башҡортостан табиптары коллегаларына коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәштә ярҙам күрһәтә. Бөтәһенең дә республиканың йоғошло сирҙәр госпиталдәрендә, шулай уҡ күсмә бригадаларҙа эшләү тәжрибәһе бар. Төркөм етәксеһе - тәжрибәле кардиолог Айҙар Әхмәтшин.

✓2022 йылда Башҡортостанда Ураҙа һәм Ҡорбан байрамдары уҙғарыу көндәре билдәле булды. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров ҡул ҡуйған тейешле ҡарар хоҡуҡи мәғлүмәт порталында баҫылған. Республикала 2 майҙа - Ураҙа байрамы, 9 июлдә Ҡорбан байрамы билдәләнә. Был көндәр эшләмәгән байрам көндәре тип иғлан ителә.

КӨНАУАЗ

**8 сентябрҙә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров БЮТ, "Башҡортостан 24", "Вся Уфа", "Сәләм", UTV телеканалдары, шулай уҡ үҙенең социаль селтәрҙәрҙәге сәхифәләре аша дүрт сәғәт дауамында тура эфирҙа һорауҙарға яуап бирҙе. Һорауҙар тормошобоҙҙоң төрлө өлкәләренә, шул уҡ ваҡытта бөгөн көнүҙәк булған мәсьәләләргә лә ҡағылды. Мәҫәлән, пандемия, битлек режимының үтәлеше һүлпәнәйеүе, ғөмүмән, тажзәхмәт сире тураһында һорауҙар тәү сиратта яңғыраны.**

# ХАЛЫҠ МЕНӘН ДҮРТ СӘҒӘТ



**Тажзәхмәт.** "Беҙ пандемия шарттарында йыл ярым тирәһе йәшәйбеҙ. Халыҡ арыны. Шуға күрә, артыҡ уңайһыҙлыҡтар тыуҙырмаҫ өсөн был мәсьәләгә бик һаҡ ҡарайбыҙ. Әлеге мәлдә COVID-19 менән көрәштең иң төп ҡоралы - вакцинация. Шуға төп иғтибар прививка кампанияһына бирелә. Әлегә беҙҙә хәл тотороҡло, ауырыусылар һаны кинәт үҫмәй, - тине Радий Хәбиров. - Бөгөн 1,2 миллион кеше прививка эшләткән, ләкин был һанды 1,8 миллионға еткерергә кәрәк. Артабан 80 процентҡа сығыу зарур, сөнки "дельта"-штамм бик агрессив һәм коллектив иммунитет барлыҡҡа килтерергә кәрәк. Әле көн һайын 8 мең кеше прививка эшләтә. Вакцинация - бөгөн тыныс тормош режимына күсеүҙең берҙән-бер ысулы".

**Эске туризм.** Республика Башлығы фекеренсә, бөгөн төбәк үҙенең туристик маршруттарын интернетта, социаль селтәрҙәрҙә пропагандалауҙа артта ҡала. "Мин республика буйынса күп йөрөйөм, ҡайһы бер урындарҙа хатта туҡтап ял итеү, йә ҡул йыуыу урындары ла булмауын күрәм. Шуға күрә юл буйы сервисын үҫтереүгә иғтибар бүлдек, тотош программа ҡабул иттек. Алдағы ике йылда был йүнәлештә һиҙелерлек үҙгәрештәр күрербеҙ, бик күп кафе, кемпинг, заправкалар, бәҙрәфтәр барлыҡҡа килер, тип уйлайым. 2020-2024 йылдарҙа Башҡортостанда автомобиль юлдары буйында 1000 яңы объект төҙөү планлаштырыла", - тине ул.

Республика етәксеһе белдереүенсә, шулай уҡ ЮНЕСКО-ның геопарктар системаһын үҫтереүгә лә ҙур иғтибар бирелә. Әлеге ваҡытта "Янғантау" геопаркы был халыҡ-ара статусҡа эйә, уға "Торатау" геопаркы ла дәғүә итә.

**Киң масштаблы саралар.** Пандемия осоронда Бөтә донъя фольклориадаһы, Спорт көрәше буйынса юниорҙар араһында донъя беренселеге, "Йәш һөнәрмәндәр" (WorldSkills Russia) милли чемпионаты финалын үткәреү буйынса һорауға Радий Хәбиров түбәндәгесә яуап бирҙе: "Был ваҡиғаларҙың һәр ҡайһыһы үҙ тарихына һәм Башҡортостан өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. Һәр осраҡта ла зыян менән файҙа араһында баланс эҙләнек. Уларҙың файҙаһы күберәк. Бик күп актуаль мәсьәләләргә күҙебеҙ асылды". Әйткәндәй, саралар барышында барлыҡ һаҡланыу саралары ҡаты күҙәтелә.

**Шәхси контроль.** Ниһайәт, күптән көтөлгән һорау ҙа яңғыраны эфирҙа: ни өсөн Радий Хәбиров шәхсән үҙе айырым ведомстволар һәм уларҙың етәкселәре яуаплы булған тар мәсьәләләрҙе хәл итеү менән шөғөлләнә? Уйлап ҡараһаң, республика Башлығының эше ҙурыраҡ һәм ҡатмарлыраҡ проблемаларҙы хәл итеү, ведомстволар эшмәкәрлегенән бер нисә аҙымға алдараҡ барыу булырға тейеш. "Системаны көйләү, аныҡ һәм һөҙөмтәле эшләү өсөн барыһына ла үҙеңә төшөнөргә кәрәк, - тине ул. - Был, ысынлап та, еңел түгел, шул уҡ ваҡытта хәүефле лә. Ҙур республика етәксеһе булараҡ, минең бурысым - аналитикаға, күләмле проекттарға, федераль үҙәк менән эшләүгә, халыҡ менән аралашыуға күберәк иғтибар бүлеү. Хәҙер Хөкүмәткә, муниципалитеттарға яңы кешеләр килде. Тиҙҙән яйлап ҡына был мәшәҡәттән арынырмын һәм иғтибарымды күберәк стратегик мәсьәләләргә бирермен, тип уйлайым".

**Баш ҡала транспорты.** Баш ҡала халҡы ҡала транспорты эшен ойоштороу мәсьәләһенә, аныҡлап әйткәндә, водителдәрҙең "Алға" картаһы менән түләүҙәрҙе ҡабул итергә теләмәй, ҡулаҡса менән иҫәпләшеүҙе талап итеүҙәренә, маршруттарҙың булмауына зарланды. "Әлеге ваҡытта "Башавтотранс" төп транспорт булып һыуына, әммә тотош ҡаланы дәүләт транспорты менән генә тәьмин итеп бөтөп булмай. Әре шәхси компаниялар иһә дәүләт тәҡдим иткән шарттарҙа хеҙмәттәшлек итергә теләмәй. Әле ҡулаҡсаны "һоро зонанан" сығарыуға, йәғни шәхси компанияларҙа эшләүселәрҙең һалым түләүенә өлгәшергә тырышабыҙ. Шуның өсөн "Алға" транспорт картаһы индерелде лә инде. Йыл һуңына тиклем баш ҡаланан барлыҡ иҫке "ПАЗ"-дарҙы алып бөтәсәкбеҙ. Хәл итәһе мәсьәләләр күп, әммә быларҙың осона сығырбыҙ, халыҡ транспорт тәьминәтенә әҙерәк зарланыр, тип ышанам", - тине Радий Фәрит улы.

**Ҡала парктарын төҙөкләндереү.** Радий Хәбиров өфөләрҙең ҡала парктарын төҙөкләндереү буйынса социаль селтәрҙәрҙәге үҙ сәхифәләрендә ойошторған тауыш биреүҙә әүҙем ҡатнашыуын билдәләне. Барлығы 61 мең самаһы граждан ҡайһы парк зонаһын алдан төҙөкләндереү буйынса үҙ фекерен белдергән. "Беҙ Нефтехимиктар паркының проектын эшләй башлайбыҙ, - тине Радий Фәрит улы, иң күп тауыш йыйған территорияны билдәләп. - Унда киләһе йылда эш башлап, ике йылдан халыҡҡа матур, яҡшы парк тапшырасаҡбыҙ". Шулай уҡ 2022-2024 йылдарҙа Дим районының Үҙәк паркы, Йылы күл территорияһы, Урманселәр паркы икенсе һулышын аласаҡ һәм 22 районда үҙәк майҙандар төҙөкләндереләсәк.

**БСК, Ҡуштау.** Төбәктең "Башҡортостан сода компанияһы" акцияһының контроль пакеттарына эйә булыуы буйынса һорауға Радий Хәбиров: "Росимущество менән 11,7 процент+1 акцияны Башҡортостан Хөкүмәтенең контролендә булған структураларҙың ышаныслы идаралығына биреү тураһында килешеү төҙөнөк. Икенсе этап - Рәсәй Хөкүмәте менән был предприятиеның эшен ойоштороу тәртибе тураһында килешеү төҙөү. Республика идара итеүҙе, сеймал менән тәьминәтте, башҡа оператив мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе үҙ өҫтөнә ала. Бынан тыш, рекордлы етештереү һәм финанс күрһәткестәре тураһында һөйләй алабыҙ. Мәҫәлән, йылдың тәүге яртыһында килем 43 процентҡа артып, 8,6 миллиард һум тәшкил итте. Акционерҙар йыйылышынан һуң предприятиеның социаль һәм экологик яуаплылығын асыҡлаясаҡбыҙ", - тип белдерҙе.

Радий Фәрит улы тағы бер тапҡыр БСК-ның артабанғы яҙмышы ниндәй булырға тейешлеге тураһында фекер Ҡуштауҙа халыҡ менән осрашыуҙан һуң барлыҡҡа килеүен һыҙыҡ өҫтөнә алды: "Мин шул саҡта хата яһауымды һәм баһаларымдың дөрөҫ булмауын аңларға тейеш инем. Президенттың ярҙамы менән был хәлдән сыҡтыҡ. Ә бына йәмғиәткә һалынған яраларҙы дауаларға кәрәк".

**Ҡоролоҡ, янғындар.** Быйылғы ҡоролоҡ йылында Башҡортостанды урман янғындары ла ҡаҡшатты. Урындағы халыҡ, республика ирекмәндәре унда әүҙем ҡатнашты, әммә урман ситен һөрөп сығыу өсөн ҙур техника булмауы ҡатмарлыҡтар тыуҙырыуы бер кемгә лә сер түгел. Был йәһәттән республика Башлығы 1 ноябргә төбәктә янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеүҙең яңы стратегияһы булдырыласағын белдерҙе. Шул уҡ ваҡытта янғындар ваҡытында "Газпром нефтехим Салават", "БСК", Учалы тау-байыҡтырыу комбинаты кеүек эре предприятиеларҙың ҙур техникаһы йәлеп ителәсәге тураһында ҡарар ҡабул ителгән, сөнки районлар үҙ балансында ауыр техниканы тота алмай. "Эксперттар баһалауынса, тәбиғәт янғындары артасаҡ. Уларға бөгөндән әҙер булырға кәрәк. Беҙ урманлы районларҙа "Лесохранитель" мониторинг системаһының өс комплексын ҡуйҙыҡ, улар ситтән тороп урман янғындарын күҙәтә ала. Ростех дәүләт корпорацияһы менән үҙебеҙҙә сығарылған КА-32 янғын-ҡотҡарыу вертолетын алыу тураһында килештек", - ти Радий Фәрит улы.

Әйткәндәй, янғындан һәм ҡоролоҡтан миктәгән Урал арьяғы, атап әйткәндә Хәйбулла, Баймаҡ, Йылайыр, Ейәнсура районларына бюджеттан 75 миллион һум аҡса бүленәсәк.

**Рәсәй Президенты менән мөнәсәбәт.** Августа ил президенты Башҡортостанда Австрияның "Ласселсбергер" холдингының "Цемикс" ҡоро төҙөлөш ҡатнашмаларын сығарыу буйынса заводтың беренсе сиратын асыу тантанаһында ҡатнашып, Радий Хәбиров менән осрашҡайны. "Президенттың республикаға яҡшы мөнәсәбәте - тәү сиратта ул Башҡортостан халҡына яҡшы мөнәсәбәт. Бөтә донъя санкциялар менән янағанда, аяғында ныҡлы торған Австрия бизнесмены республикаға 8 миллиард һалды, тағы ла 15 миллиард һаларға йыйына. Президент менән осрашҡандан һуң ике-өс аҙна үткәс беҙ студенттар кампусы төҙөү буйынса ҡарар алабыҙ. Уны ҡала уртаһында төҙөйәсәкбеҙ. Студенттар уҡыу корпустарына, лабораторияларға, мәҙәни һәм спорт биналарына яҡын йәшәргә тейеш", - ти республика Башлығы һәм үҙенең ысын путинист булыуын белдерә.

**Ғөмүмән, тура эфирҙа тормоштоң барлыҡ өлкәләре буйынса ла, республика Башлығына шәхси ҡағылышлы ла һорауҙар яңғыраны. Улар Республика менән идара итеү үҙәгендә тупланып барҙы һәм хатта эфирға сыҡмағандары ла яуапһыҙ ҡалмаясаҡ. Тел төбөн аңлағанһығыҙҙыр: эфирҙа яңғыраған һорауҙарға яуаптарҙың барыһын да гәзит биттәренә индереп булмай. Әммә мәҡәлә башында атап үтелгән телеканалдарҙың рәсми сайттарындағы яҙма менән теләгән ваҡытта таныша алаһығыҙ. Десертҡа иһә барыһын да ҡыҙыҡһындырған һорау: "Хәбировты кем алмаштырыр?" Радий Хәбиров был мәсьәләнең үҙ ихтыярында булмауын, ә халыҡ һәм ил Президенты хәл итеүен белдерҙе. Шулай ҙа уның ҡатын-ҡыҙ булыу мөмкинлеген дә йөшермәне. "Бөгөн беҙҙең ике районда хакимиәт башлыҡтары ҡатын-ҡыҙ, һәм бик "боевойҙар", - тине ул. Хәйер, алдан ҡыҫҡырмайыҡ, һәр нәмәне ваҡыт хәл итә. Һәр хәлдә, изге урын буш булмаҫ.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Баш ҡалала тәүге ҡала крематорийы төҙөлөшөн башлау ваҡыты билдәле булды. Өфө хакимиәте башлығының беренсе урынбаҫары Марат Ғәйфуллин һүҙҙәренсә, эшселәр төҙөлөш майҙансығына 2022 йылдың йәй башында уҡ сығырға мөмкин. "Хәҙер проект дәүләт экспертизаһын үтә, - тип билдәләне баш ҡаланың коммуналь хужалыҡ идаралығы етәксеһе Рөстәм Хәмитов. - Киләһе йылдың февралендә һыңғай һыйымта алыу планлаштырыла".

✓Бөгөн, 11 сентябрҙә, Башҡортостандың баш ҡалаһында өмә ойоштерола. Ҡала тормошон тәьмин итеү идаралығы етәксеһе Асҡар Батталов һүҙҙәренсә, 8 сентябрҙә Өфөлә санитар айлыҡ башланды, ул 8 октябргәсә дауам итә. "Ошо шөмбелә "Йәшел Рәсәй" Дөйөм Рәсәй экологик өмәһе уҙғарыла, унда бөтә милек формаһындағы ойошмалар, предприятиелар ҡатнаша. 25 сентябрҙә иһә "Йәшел Башҡортостан" акцияһы ойоштороЛа". Өфөлә 2,5 мең ағас һәм 250 ҡыуаҡ ултыртыу күҙаллана.

✓"Өфө" халыҡ-ара аэропортынан яңы йүнәлештәр асыла. Башҡортостандың баш ҡалаһынан Доминикана Республикаһына, Әзербайжанға, Мысырға осорға мөмкин. 1 октябрҙән "Аэрофлот" авиакомпанияһы Баҡы - Өфө - Баҡы йүнәлеше буйынса оса башлай. 5 октябрҙән Доминиканаға осорға мөмкин. AZUR авиакомпанияһы Ла-Романа - Өфө - Ла-Романа йүнәлеше буйынса оса башлай. 8 октябрҙән 12 көнгә бер тапҡыр Пунта-Кана - Өфө - Пунта-Кана йүнәлеше буйынса осоштар башлана.

✓Башҡортостандан һөт ризыҡтары Африкаға оҙатыла башлай. "Мәләүеҙ һөт-консерва комбинаты" үҙенең продукцияһын Нигерияға оҙатырға ниәтләй. "Цербер" системаһы аша предприятиеның Нигерия ветеринар-санитар талаптарына тура килеүен билдәләү өсөн электрон гариза бирелгән. "Тикшереү һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, предприятиела Африка иленә әҙер һөт продукцияһын оҙатыу өсөн талап ителгән барлыҡ ветеринар-санитар шарттар үтәлә", - тип хәбәр иттеләр Ветеринар һәм фитосанитар күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан идаралығы матбуғат хеҙмәтенән.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Быны баш ҡаланың насар тороштағы бер нисә паркы ла раҫлай. Мәҫәлән, Ибраһимов бульвары, Йәштәр бульвары. Улар ҡасандыр проектланған булған, исем өсөн генә тормошҡа ашырылған һәм яҙмыш ҡосағына ташланған.*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# КӨҘГӨ ӨМӘЛӘР БАШЛАНА...

**Баш ҡала тағы ла һынау үтә. Юҡ, әллә нимә уйламағыҙ, бары тик Өфөнөң иң тығыҙ булған Октябрь проспекты менән СССР-ҙың 50 йыллығы исемендәге урам сатындағы юл хәрәкәтенә адаптация режимында идара итеү пилот проектын һынап ҡарау тураһында ғына һүҙем. Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмәлә лә һүҙ шул хаҡта барҙы.**

Адаптацияның төп принцибы юл хәрәкәте ни тиклем тығыҙ, светофор циклы оҙайлығының шул тиклем артыуынан ғибәрәт, йәғни ҡайһы яҡҡа транспорт күберәк үтә, шул яҡҡа үткәреү циклы оҙағыраҡ тора. Был проект ыңғай баһаланған да инде, шуға күрә уны киләсәктә ҡала территорияһында ҡулланыу планлаштырыла. Әйткәндәй, Юл хәрәкәте ҡағиҙәләренә лә үҙгәрештәр индерелгән. Был хаҡта Рәсәй Эске эштәр министрлығы Өфө ҡалаһы буйынса идаралығы ЮХХДИ бүлексәһенең юл хәрәкәте хәүефһеҙлеген пропагандалау буйынса бүлек начальнигы Альбина Кадикова хәбәр итте. 1 сентябрҙән ҡағиҙәләрҙән 2013 йылда индерелгән 8.23 "Фотовидеофиксация" билдәһе алынып, уның урынына яңы 6.22 "Фотовидеофиксация" билдәһе ҡуйыла. 8.23 билдәһе элек юлдағы һәр камера алдынан ҡуйылһа, хәҙер юл билдәһе үҙ аллы, аныҡ




контроль арауығын аныҡламай ҡулланыла. Мәҫәлән, кеше йөшөгән биләмәләрҙән ситтә 150-300 метрҙан алып зона контроленә тиклем арауыҡта, биләмә эсендә 5.23.1; 5.23.2 йәки 5.25 "Кеше йәшәгән биләмә башы" билдәләре менән ҡуйыла. Кәрәк ваҡытта "Фотовидеофиксация" юл билдәһе 8.1.1 "Объектҡа тиклем ара", 8.13 "Төп юл йүнәлеше" һәм 8.14 "Хәрәкәт һыҙаты" табличкалары менән бергә ҡулланыласаҡ. Яңы билдәне бары тик биләмәгә генә ингәндә ҡуя алалар, әммә ул тотош территория өсөн ғәмәлдә була. Аныҡлап әйткәндә, билдәне ауыл, ҡасаба йәки ҡалаға ингәндә бер урында ғына күрергә мөмкин буласаҡ, ә биләмәгә ингәс, водитель юл ҡағиҙәһен боҙһа, бер генә түгел, бер нисә камера төшөрөп алыуы мөмкин. Яңы билдә Өфөгә ингән урында ҡуйылған да инде.

Шулай уҡ оператив кәңәшмәлә Өфөнөң "ПомЦентр" индустриаль паркы резиденты булған "МВС Мехатроника" яуаплылығы сикләнгән ширҡәттең уңышлы эшмәкәрлеге тураһында уның директоры Игорь Колегов һөйләне. Предприятиеның төп эшмәкәрлеге булып төрлө техник, шул иҫәптән тиҙ яныусы шыйыҡсаларҙы һауыттарға тултырыу өсөн ҡоралмалдарҙы проектлау һәм эшләү тора. Сығарған ҡоралмалдарҙың юғары дәрәжәлә механизациялаһыуы һәм роботлаштырылыуы хәүефле материалдарҙы фасовкалауҙың иң ҡатмарлы мәсьәләләрен хәл итә.

Ҡала хакимиәте, әлбиттә, шундай инвесторҙарҙан эшләкле тәҡдимдәр көтә һәм һәр яҡлап ярҙам итергә әҙер.

Һәм тағы ла: яҙын-көҙөн һәр ерҙә территорияны санитар таҙартыу айлыҡтары үтә. Баш ҡалала ул 8 сентябрҙә иғлан ителеп, 8 октябргәсә дауам итә. 11 сентябрҙә Өфө "Йәшел Рәсәй" Бөтә Рәсәй экологик өмәгә ҡушылһа, 25 сентябрҙә йәмәғәт территорияларында һәм йорт ихаталарында ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртыу буйынса "Йәшел Башҡортостан" акцияһы ойошторола.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# СОВЕТ МАЙҘАНЫНДА...

**Өфөнөң Совет майҙанында яңы фонтан эшләй башланы. Уны асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты.**



Совет майҙаны 2020 йылдың йәйендә төҙөкләндерелә башлағайны. Төҙөүселәр биләмәне 6 метрға киңәйтте, үҫеп ултырған 30 йүкәне һаҡлап ҡалырға хәл итеүлде, һуңынан уларҙы йәш үсентеләр менән алмаштырыу күҙаллана. Радий Хәбиров төҙөкләндерелгән Совет урамын ҡарап сыҡты. Бында юл япмаһын тулыһынса яңыртҡандар, ҡойма ямғыр канализацияһын урынлаштырғандар, тротуарҙарҙы киңәйткәндәр, тышҡы яҡтыртыу системаһын, үҙенсәлекле формалағы эскәмйәләр ҡуйғандар. Яңы ағастар ултыртылған, уларҙы өфөләр үҙҙәре һайлаған: декоратив саған, миләш, сирень ҡыуаҡтары һәм башҡалар. Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты алдында "Студенттар" скверы барлыҡҡа килде. Хәҙер Нариман Сабитов исемендәге 1-се балалар музыка мәктәбе алдында ла ошондай матур сквер бар. Унан тыш, Совет майҙанында Рәсәй Геройы, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы командиры Минлеғәли Шайморатовҡа һәйкәл ҡуйыла. Майҙанды һәм Рәсәй Геройы, Башҡорт атлы дивизияһының легендар командиры Минлеғәли Шайморатов һәйкәлен 2022 йылда асыу күҙаллана. Республика етәксеһе хәбәр итеүенсә, асыу тантанаһын Еңеү көнөнә, Республика көнөнә йәки генерал Шайморатовтың тыуған көнөнә тура килтерергә мөмкин.

Ял көндәрендә Пушкин урамынан Октябрь революцияһы урамына тиклемге участкала транспорт хәрәкәтен сикләү планлаштырыла. Шулай итеп, Совет майҙаны һәм уның янындағы биләмә йәйәүлеләр зонаһы булыуы ихтимал.

Өфөнөң Совет майҙанында йыл һайын сағыу музыкаль сара ойошторола башлай. Радий Хәбиров Башҡортостандың мәҙәниәт министрына әлеге сара буйынса тәҡдимдәр индерергә ҡушты.

БАШ ҠАЛАМ



# БАР ПАРКТАР ҘА...

## төҙөкләндереү талап итә

**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәрҙә ҡала парктарын ниндәй сират буйынса төҙөкләндереү кәрәклеге тураһында халыҡтың фекерен һорағас, мин дә үҙ фекеремде еткерергә булдым.**

Әлбиттә, Аксаков исемендәге мәҙәниәт һәм ял баҡсаһы, Ленин исемендәге, Урмансылар, Дим биҫтәһенең Үҙәк, Якутов исемендәге, Нефтехимиктар, М. Ғафури исемендәге парктар баш ҡаланың билдәле парктары һәм улар мотлаҡ юғары кимәлдә булырға тейеш. Әммә, шул уҡ ваҡытта, бүленгән сығымдарға ҡарап, уларҙы төҙөкләндереүҙе эҙмә-эҙлекле, йәғни барыһын да бер ваҡытта башлап, һуңынан "һаҡаллы төҙөлөшкә" әйләндереп түгел, ә сиратлап башҡарырға кәрәк. Һәм был эште профессиональ кимәлдә, реконструкция эштәренең сифатлы проектын эшләп, уны архитекторҙарға, дизайнерҙарға, рәссамдарға, ландшафт менән шөғөлләнеүселәргә эшләргә ҡушып, артабан инде тормошҡа ашырыуҙы тикшерелгән, һыналған, тәжрибәле төҙөүселәргә, биҙәүселәргә йөкмәтергә мөмкин.

Был мәсьәләлә дилетантлыҡтан да насар нәмә юҡ һәм быны баш ҡаланың насар тороштағы бер нисә паркы ла раҫлай. Был шулай уҡ скверҙарға һәм бульварҙарға ла ҡағыла. Мәҫәлән, Ибраһимов бульвары, Йәштәр бульвары. Улар ҡасандыр проектланған булған, исем өсөн генә тормошҡа ашырылған һәм яҙмыш ҡосағына ташланған.

Миненсә, парктар, бульварҙар, урамдар берберенән айырылып торорға тейеш. Тап профессионал белгестәр шулай эшләй ҙә инде: улар концепция эшләй, бәләкәй архитектура формалары, скульптуралар һайлай, проекты тормошҡа ашырыуға ижади ҡарай. Бында шуны ла онотторға ярамай - сифатлы, үҙенсәлекле нәмә ҡиммәтерәк баһалана. Юҡһа, һаран ике йәйнә өс тапҡыр түләй булып сыға. Шуға күрә, һуңынан тишек ямап йөрөмәҫ өсөн, бер тапҡыр эшләгәндә үк сифатлы материалдарҙан эшләргә - барлыҡ проект ҡарарҙарын, технологик процестарҙы һаҡларға, климат шарттарын иҫәпкә алып башҡарырға кәрәк.

Мәҫәлән, Урмансылар паркы. Насар булмаған ниндәйҙер парк эшләп ҡуйҙылар, ул ҡала халҡы араһында бик популяр. Спортсылар, йәштәр һәм ололар, балалы ғаиләләр унда иртәнән кискә тиклем була. Әммә барлыҡ майҙансыҡтар ҙа тәрбиәләнмәй, сүп-сар бик күп, кискеһен яҡтылыҡ юҡ. Яңы башланғысҡа ярҙам итергә кәрәк. Профессионаллек, финанслау, формаль булмаған ҡараш - быны ҡала өсөн мөһим булған ошо мәсьәләнең төп өлөштәре.

Баш ҡаланың барлыҡ парктары ла төҙөкләндереү талап итә, әммә бында ян-яҡҡа бәргеләнмәй, тәүҙә бер эште осона алып барып еткерергә, шунан икенсеһенә тотоноу мөһим.

**Леонид ДУБИНСКИЙ, архитектор.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

## Аяҡ һыҙлаһа

❖ Ҙур һауытта бер бәйләм туҡранбашты ҡайнатырға. Һыуығас һөҙөргә һәм бер ҡалаҡ кәрәсин ҡушырға. Ошо рәүешле 3-4 кис аяҡтарға ванна эшләргә.

❖ Элек аяҡ һыҙламаһын тиһәң, зәржә (фәрҙә, керән көпшә лә тиҙәр, русса "сныть") аша, ти торғайнылар. Уны миҙгелендә шул көйө ашарға була, ә ҡышҡыға кәбеҫтә кеүек тоҙлайҙар. Зәржә һутына бәпембә, ҡурай еләге һәм ҡара көртмәле һуттарын һәм берәр балғалаҡ меңъяпраҡ менән гөлбаҙран онтаҡтарын ҡушһаң, организмды таҙартыусы сара әҙер була. Тик был рәүешле дауаланғанда һөтлө һәм итле аштар ашамай тороу кәрәк.

## Аяҡтар шешенһә

❖ Ҡыҙыл миләш емештәре был осраҡта бик яҡшы ярҙам итә. Емештәрҙе ит турағыс аша үткәреп, төпрәһен һығып алырға һәм 1 литр һут әҙерләргә. Шуға 600 грамм шәкәр ҡушып, әҙер булғансы ҡайнатырға. Был ҡайнатманы сәйгә 2-шәр балғалаҡ ҡушып эсергә. Уның ярҙамында бөйөрҙәр таштан таҙарына, ә аяҡ шешенеүе бөтә.

❖ Шулай уҡ был ауырыуҙан петрушка тамырынан әҙерләнгән төнәтмә яҡшы. Әҙерләмәнең 1 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 10 сәғәт төнәтергә һәм көн дауамында 1-әр ҡалаҡ эсеп йөрөргә.

## Шәкәр диабеты

❖ Составында баҡыр күп булған ҡыҙыл көртмәле япрағы шәкәр диабетын дауалағанда бик файҙалы. Бер ус ҡыҙыл көртмәле япрағына 3 стакан һыу ҡойоп, 10 минут ҡайнатырға. Көнөнә 3 тапҡыр берәр стакан эсергә. Был ҡайнатма диабетты дауалағанда ғына ярҙам итеп ҡалмай, бөйөрҙә һәм үт ҡыуығындағы таштарҙы ла иретә. Башҡа үләндәр менән бергә ҡулланғанда шәкәр диабетына ҡаршы файҙаһы арта ғына.

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы ике баш һуғанды ҡабығын әрсемәй мейестә бешереп, һыуытырға һәм икмәк, тоҙ ҡушмайынса, башҡа бер нәмә лә ҡушып тәғәмләмәй һәм эсмәйенсә ашарға. Бер сәғәт үткәс, иртәнге ашты ашарға ярай. Был рәүешле бер ай дауамында көн дә дауаланырға. Шунан ҡанда шәкәр күләмен тикшереп ҡарағыҙ, нормаға килмәһә, дауаланыуҙы ҡабатларға була.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ *"Нишләп полковникка ынтылманың?" - тип һорау биргәндәре лә бар. Бына ошо мәсьәләнең дә тыуған яҡ менән бәйле булыу хикмәте бар. "Полковник погондарын тыуған яғыма алыштырҙым", тип әйтһәм дә хаталанамаҫмын.*



ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ

Эйәрҙең яҫы яғын күберәк Башҡортостандың көньяҡ-көнсығышында: Ишембай, Белорет, Бөрйән, Баймаҡ һ.б. районларында семәрләгәндәр. Биҙәк йыш осраҡта ҡатын-ҡыҙҙар эйәренә һалынған, ә ирҙәр ҡулланған эйәрҙәрҙә биҙәк баҫылған металл пластиналар менән матурлағандар. Ҡабарынҡы һәм уйым биҙәктәр ҡулланылған. Шыршы биҙәк һалынған, мөһөр һәм сәскә өйкөмдәре, тештәр, бер рәткә теҙелгән йәки дуғаланып киткән тырнаҡҡа оҡшаш уйымдар эшләнгән. Үҫемлек композициялары һирәк осраған: һабаҡта өс япраҡ һ.б. Биҙәктәр ғәҙәттә эйәр ҡашының үҙәгендә, ҡырҙары буйлап өҫкө һәм аҫҡы яҡта урынлашҡан. Күп эйәрҙәрҙең ике яҡлап та ҡаштары биҙәкле булған.



*Эйәрҙең артҡы ҡашындағы семәр. АЭМ фондынан (Өфө ҡ.). Т.К. Сурина фотоһы*

Ҡайын тамырын ҡырҡмайынса эшләнгән йәки бер нисә өлөштән торған ағас өҙәңгеләрҙең формаһы матур булған. Бөтөн ағастан эшләнгән өҙәңгеләр тамсыға оҡшаш итеп яһалған (эске яғы өсмөйөшкә яҡынайтылған) йәки өҫ яғы дуғаланып торған металл өҙәңгеләрҙе хәтерләткән. Ҡайһы бер оҫталар үҙҙәре эшләгән өҙәңгене ҡара йәки ҡара-һоро төҫкә буяған.



*Ағас өҙәңгеләр. АЭМ (Өфө ҡ.) һәм ВЭМ (Будапешт ҡ.) фондтарынан*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*УЙЛЫҒА - УЙ*

# СЫЛБЫРҘАЙ ТЕҘЕЛЕП, ҠАЙТЫҒЫҘ...

**(Башы 2-се биттә).**

Бушлай бирелгән (хатта юл хаҡы ла түләнгән) путевка менән күп кенә хеҙмәттәштәр файҙаланып ҡалырға тырыша, тик теләүселәрҙең барыһын да бер юлы тәьмин итеп бөтөү мөмкин дә түгел шул. Айырыуса йәй көндәре. "Кемдең ҡулында - шуның ауыҙында" тигән әйтем бар бит әле халҡыбыҙҙа. Башҡаларға шундай путевкалар яҙып биргеләгән кеше булараҡ, диңгеҙ буйына йә Кавказға шәхсән минең үҙемдең дә йыш ҡына йөрөү мөмкинлегем бар ине... Кемдәргәләр, бәлки, быға ышаныуы ла ауыр булыр, әммә ял йортона йә санаторий-мазарға бер мәртәбә лә барғаным булманы! Улай ғына ла түгел, ошо хаҡта башыма уйҙар ҙа инеп сыҡмай торғайны. Йылына бер генә бирелгән ялымды йыл буйы һағынып, зар-интизар булған тыуған яғыма - Башҡортостаныма ҡайтыу өсөн генә файҙаландым. Хеҙмәттәш офицерҙарҙың өгөтләгәне лә булманы түгел, әлбиттә. Һәр төрлө Кавказ тәбиғәте фонында йә Ҡара диңгеҙ ярында ғаиләләре менән төшкән төҫлө фотоһүрәттәрен дә күрһәтеп маҡтанғылай торғайнылар. Тик, нишләптер, быларҙың береһе лә мине ҡыҙыҡтырманы. Хатта үҙ ғүмеремдә бер мәртәбә лә диңгеҙ күргәнем юҡ, тип тә әйтер инем, әммә хәрби бурысымды үтәгән дәүеремдә күпмелер ваҡыт Дағстандың Буйнак ҡалаһында булырға тура килде. Каспий диңгеҙенән алыҫ түгел, Төньяҡ Кавказ тауҙары итәгендәге был ерҙең тәбиғәте лә иҫ китерлек тип әйтер инем, һәр төрлө емеш ағастарына ла бай, матурлығы буйынса Ҡара диңгеҙ буйынан да кәм түгелдер, тип уйлайым. Барыбер ерһенмәнем. Ниндәй генә гүзәл һымаҡ булып тойолһа ла...

Тыуған яғым хаҡындағы уйҙарым, хыялдарым бер минутҡа ла мине ҡалдырманы. Туғандарымды, дуҫтарымды, таныштарымды, яҡташтарымды - илгәҙәк, эскерһеҙ, ябай халҡымды ҡайтып күреү теләге һәр саҡ илемә генә саҡырып торҙо. Күк Ирәндегемде, унын, әлеге ҡаҙаҡ бабайы иҫләгән текә-текә ҡая таштарын, Таналыҡ, Һаҡмар, Йылайыр йылғаларын тағы-тағы күреп, көмөштәй йылтыр һыулы Талҡаҫ күленең матурлығы менән хозурланыуҙы, милләттәштәрем менән ауыҙ тултырып, башҡортсалап һөйләшеп, шунан оло ҡәнәғәтлек кисереүҙәремде бер ергә лә алыштырғым килмәне. Башҡортостаныма ялға ҡайтҡан мәлдәремдә үҙемде оҙаҡ ваҡыттар эҫе сүлләктә һыуһап йөрөгән һәм, ниһайәт, һалҡын шишмәгә барып етеп, ана шуның сылтырап ағып ятҡан көмөш һыуын ләззәтләнеп эскән кеше һымаҡыраҡ тоя инем. Илемә алып ҡайтып барған поезым Свердловск өлкәһен үтеп, Силәбе тирәләренә яҡынлаша башлағас та, ҡайынлы урман ҡатыш ҡылғанлы яландар башлана. Бына шул саҡ, әллә Урал арьяғы далаларында тыуып үҫкәнгәме, тын алыуҙарым иркенәйеп, рәхәтләнеп ҡалғандай булам, әйтерһең, ниндәйҙер бер ябыҡ бина эсендә оҙаҡ бикле тороп, саф һауаға сыҡҡанмын... Ә инде вагонда берәй яҡташың осрап,



башҡортсалап һөйләшеп алып китһән, оҙаҡ күрешмәй торған яҡын туғанынды күргәндәй булаһын. Яҡташтарымдың асыҡ, ябай ғына итеп йылмайыуҙары ла башҡа ерҙәгеләрҙәкенән ҡырҡа айырыла һымаҡ...

Бәғзе берәүҙәрҙән: "Подполковникка барып етеүен-еткәс, нишләп артабан полковникка ынтылманың?" - тип уйынлы-ысынлы һорау биргәндәре лә бар. Бына ошо мәсьәләнең дә тыуған яҡ менән бәйле булыу хикмәте бар. Әлбиттә, был юғары дәрәжә бер кемгә лә ҡамасаулалмай, әммә, "Полковник погондарын тыуған яғыма алыштырҙым", тип әйтһәм дә хаталанамаҫмын, тип уйлайым. Оҙаҡ йылдар Башҡортостанға иң яҡын булған (Сибайҙан 175 саҡырым ара) Стратегик ракета дивизияһының бер госпиталендә һөнәремә яраҡлы урын бушағас та бөтә тырышлығымды шунда күсеүгә һалдым. Тап ана шул осор минә юғары штабта ҙур вазифа биләгән элекке хеҙмәттәшем шылтыратты. Волгоград өлкәһендәге полигонда "полковник" званиеһына торош иткән бер урын барлығы хаҡында хәбәр итеп, мине шунда саҡырҙы. Мин: "Юҡ, Ҡарталы ҡалаһына барам. Минең тыуған илемдең кәртә артында ғына ята бит ул..." - тип шаяртып яуап биргәс, танышым, әлбиттә, ғәжәпләнде...

Хеҙмәтемде артабан дауам иткән ана шул ҡалала Башҡортостандың Урал арьяғын төйәк иткән милләттәштәремә бер аҙ ғына оҡшай биргән (бәлки, был минең субъектив тойғом ғыналыр) ҡаҙаҡ халҡы күпләп йәшәй. Көньяҡ Ҡаҙағстан кешеләренә ҡарағанда башҡасараҡ, хатта төҫтәре, һөйләшеүҙәре лә башҡортсаға яҡыныраҡ һымаҡ ундағы ҡаҙаҡтарҙың. Борон-борондан башҡорттар менән күрше йәшәп, ваҡыт-ваҡыты менән бер-береһенән ҡыҙ урлашып, ә күпселек осраҡта татыу ғына килешеп, ҡоҙалашып ғүмер иткән был халыҡ вәкилдәрендә бер аҙ башҡорт ҡаны ла бар һымаҡ тойолдо (үҙебеҙҙең Хәйбулла, Баймаҡ райондарында ла бик боронғо ҡартаталары ҡаҙаҡ милләтенән булған кешеләрҙе беләм)... Үҙемдә инде Башҡортостанда йәшәгән һымаҡ итеп тоя башлауыма ҡарамаҫтан, ял һайын тигәндәй, байтаҡ ҡына булған араны яҡын итеп, Атайсалыма ҡайта һалып етә торғайным...

...Отставкаға сығып, Башҡорт иленә бөтөнләйгә күсеп ҡайтыуыма ла инде ун ете йыл булып китте. Бәлки, күптәр ғәжәпләнеүе лә бар, әммә тағы шуны әйтер инем: буш ваҡытым, матди хәлем дә етерлек булыуына ҡарамаҫтан, әле булһа тыуған төйәгемде бер көнгә лә ташлап киткем килмәй. Әлеге иҫкә алған диңгеҙ буйына ла күңелем тартмай. Бер генә хыялым - Мәккә ҡалаһына барып, динебеҙҙең биш терәгенең тағы берәүһен - хаж ғәмәлдәрен үтәп ҡайтыу. Һуңғы осорҙар, һәр төрлө сәбәп менән, бына ошо ниәтем әлегә тормошҡа ашмайыраҡ тора. Ин шәә Аллаһ, уныһына ла ирешермен. Инаныуымса, ҡайҙалыр сәйәхәт итеүҙең маҡсаты үҙенгеҙе аҡларға тейеш. Сит ерҙәрҙе тик күреп кенә ҡайтыу өсөн әллә күпме аҡса сарыф итеүҙе мин исрафҡа һанайым. Ял итеү, ниндәйҙер берәй сирҙе дауалау өсөн йә иһә, әлеге әйтмешләй, Аллаһ Тәғәлә ризалығына ирешергә тигән ниәт менән генә донъя гиҙеүҙең мәғәнәһен күрәм. Ә инде ял итергә теләгән яҡташтарыбыҙ өсөн үҙебеҙҙең башҡорт ерендә лә ял йорттары, шифаханалар, матур күлдәребеҙ, йылғаларыбыҙ етерлек. Йәй һайын ейән-ейәнсәрҙәремде машинаға тейәп, Талҡаҫ күле буйына барып килгеләйем, Һаҡмар, Йылайыр, Төйәләҫ йылғалары буйына ла сығабыҙ...

...Үҙем һымаҡ оҙаҡ ваҡытҡа ҡырға эшкә киткән йә хәрби хеҙмәттә йөрөүсе милләттәштәремә, яҡындарыма ҡараһам, һәр саҡ күңелем тула башлай, ҡасандыр бәхет эҙләп сит ерҙәргә барып тамыр йәйгән яҡташтарымды йәлләйем. Йәлләһәң-йәлләмәһәң дә, тормош булғас, шундай хәлдәр ҙә була инде, әммә күп кенә милләттәшебеҙҙең ғүмерлеккә илдән китеүе айырыуса үкенесле... Былдай ватандаштарымды тыуып үҫкән күлдәрен ҡалдырып, ҡыҙғаныс сыңрап, көн яҡҡа осҡан торналарға ла бер аҙ оҡшатам. Нәҡ йырҙа йырланғандай, уларға: "Йөрөмәгеҙ ҡаңғырып, ҡайғырап сит илдә. Оялар ҡороғоҙ ҡабаттан был күлдә. Сылбырҙай теҙелеп ҡайтығыҙ, торналар. Был күлдәй ҡамышлы гүзәл күл ҡайҙа бар?.." - тип әйтке килә. Ҡоштар йыл да тыуған күленә әйләнеп ҡайталар ҙа ул...

Ҡырға китеүсе йәштәребеҙгә тағы бер әйтер һүҙем: Ватаныңдан ғүмерлеккә айырылғың килмәһә, илдән сығырҙан алда, башта тыуған ерендә башлы-күҙле (беҙҙең яҡта "әйәле-сағалы" тип тә әйтәләр, ғаиләле, йәнәһе) булып алыу мотлаҡ. Хәләл ефеттәрегеҙҙе, боронғолар әйтмешләй, "үҙ йынысығыҙҙан" һайлап алығыҙ. Иленә, туған теленә битараф булмағандайҙарҙан, тыуған яғын һағынып, һеҙҙең менән бергә илгә кире ҡайтырҙайҙарынан... Башҡортостаныбыҙ ауыл-ҡалаларында аҡыллы, бынамын тигән эшсән, айыу тотоп менерҙәй үҙебеҙҙең ирарыҫлан егеттәребеҙ, береһенән-береһе уңған, ҡалаҡҡа ғына һалып йоторлоҡ һылыу, мөләйем ҡыҙҙарыбыҙ етерлек бит, ана шуның ҡәҙерен белеү кәрәк. Бик йәл, әммә, сит тарафтарға ла тап шундай аҫыл, әммә буйҙаҡ егет, ҡыҙҙарыбыҙ китеүсән. Башҡорт балы бөтә донъяла иң юғары баһаланған һымаҡ, беҙҙең кешеләребеҙҙе лә сит ерҙә яраталар ул. Яттарға әләгеп ҡуймағыҙ, тимәксемен. Баштараҡ телгә алынған олатайбыҙ һымаҡ, икенсе милләт кешеһе менән тормош ҡорғандар өсөн тыуған илгә ҡайтыу хыялы берәй ваҡыт буй етмәҫлек алыҫ йондоҙ һымаҡ ҡына булып ҡалыуы мөмкин. "Алтын-көмөш яуған ерҙән тыуған-үҫкән ил яҡшы", "Сит ерҙә солтан булғансы, үҙ ерендә олтан бул" тигән әйтемдәр ҙә бар халҡыбыҙҙа. Башҡа яҡтарҙа ниндәй генә юғары дәрәжә биләүеңә, нисек кенә етеш һәм бай йәшәүеңә ҡарамаҫтан, ысын бәхетте, ахырҙа, тик үҙ илеңдә генә табыу мөмкин. Ғүмерең ахырыһы еткәнгәсә үҙ-үҙеңдә тыуған илеңдә йәшәү бәхетенән мәхрүм итеү - үкенесле. Әлеге "аҙ сәйәхәт иткән" өсөн үкенеүгә ҡарағанда ла...

**Хәлил ҺӨЙӨНДӘКОВ.**

✓ *Рус документында телгә алынған сонгуттар кем булған һуң? Әлбиттә, сонгуттар - су-унгуттар ул замандағы башҡорт телендә су-онғоттар булған. Һыу, йәғни йылға онғоттары - улар, башҡорттоң унлар ырыуына тура килә.*



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ЫРЫУЫБЫҘ УНЛАР - БАБАЛАРЫБЫҘ ҺУНДАР



Башҡорт ырыуҙары XVI быуат урталарында Рус дәүләтенә ҡушылғандан бирле рус тарихи сығанаҡтарында унлар ырыуы ла иҫкә алына, әммә бында беҙ унларҙың әүәлге атамаһы ла оҙаҡ ваҡыттар буйына һаҡланып килгәнен күрәбеҙ. Мәҫәлән, 1662-1664 йылғы башҡорт ихтилалы менән бәйле бер документта Күсем хан вариҫтары менән бәйләнешкә ингән башҡорт ырыуҙары хаҡында бына ниндәй мәғлүмәт теркәлгән: "...стоит де царевич Бугай Салтан у озера Ирецташа за Исетью в степи, а с ним де стоят изменники башкирцы: сынгранцы, бушкурты, сонгуты, терсяки, айлы". Рус документында телгә алынған сонгуттар кем булған һуң? Әлбиттә, сонгуттар - су-унгуттар ул замандағы башҡорт телендә су-онғоттар булған. Һыу, йәғни йылға онғоттары - улар, һис шикһеҙ, башҡорттоң унлар ырыуына тура килә. Унлар вариҫтарының хәҙерге Ҡариҙел районында йәшәгәнен беләбеҙ. Ошо район территорияһында, Йүрүҙән йылғаһының түбәнге ағымы үҙәнендә ҡасандыр Буронғот ауылы булған - бында беҙ шул уҡ онғот этнонимын күрәбеҙ.

Тарихи Башҡортостанға килеп урынлашҡан онғот-унларҙың айырым төркөмдәре башҡа бер башҡорт ырыуҙары менән килешеүгә инеп, үҙҙәренең яңы ватанын тапҡан. Ошо һығымтаны раҫлаусы тарихи факттар ҙа бар. Мәҫәлән, башҡорт ҡыпсаҡтары составында Суун-Ҡыпсаҡ олоҫо ла теркәлә. Шуныһы ҡыҙыҡлы, Ә.-З. Вәлиди Туған үҙенең "Хәтирәләр"ендә ауылдаштарының этник сығышы хаҡында ошондай мәғлүмәт бирә: "Ауылыбыҙҙың төп халҡы ике башҡорт ырыуының - Суҡлы-Ҡай һәм Онғот вәкилдәренән булып, әүәл 30-40 хужалыҡтан артыҡ булмаған".

XIX быуаттағы Рәсәй һәм XX быуаттағы совет историографияһы мәғлүмәттәре, шулай уҡ һуңғы йылдарҙа алып барылған этнографик тикшеренеүҙәр башҡорт милләте составындағы унлар ырыуы вәкилдәренең боронғо хунну һәм Азия һундарының вариҫтары булған онғот ҡәүемөнең бөгөнгө нәҫелдәштәре булыуы хаҡындағы фекерҙе раҫлай. Менәр йылдар буйына барған этногенетик бәйләнештәр һәм үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә хәҙерге башҡорт ырыуҙары вәкилдәренең генетик сығышын бер төрлө тип әйтеп булмай. Ғөмүмән, башҡорттар - этногенетикаһы буйынса төрлө ҡәүем төркөмдәре йыйылмаһынан хасил булған халыҡ. Әммә төрлө-төрлө ырыу атамалары тамырҙарының тарихи сығанаҡтарҙа теркәлеп ҡалған үтә боронғо ҡәүем исемдәре менән булған ауаздашлығын һис инҡар итеп булмай. Башҡорт унлар ырыуы этнонимын йөрөткән төркөм вәкилдәренең үҙатамаһын иң кәмендә 2,5 мең йыл дауамында һаҡлап ҡала алыуын халҡыбыҙ тарихындағы уникаль бер күренеш итеп ҡарарға кәрәк.

Башҡортостан Республикаһының Гуманитар тикшеренеүҙәр институты һәм Рәсәй медицина фәндәре академияһының Медик-генетик ғилми үҙәге коллективтары 2012-2013 йылдарҙа профессор Е.В. Балановская етәкселегендә башҡорт халҡының генофондын өйрәнеү буйынса тикшеренеүҙәр үткәргәйне. Ул саҡта Ҡариҙел районында йәшәгән унлар ырыуы вәкилдәренән 9 кешенең генетик маркерҙары асыҡланды. Һөҙөмтәлә уларҙың барыһының да R1a-M198 гаплотөркөмөнә ҡарауы асыҡланды. Ошо гаплотөркөм табын, ҡатай, ҡыҙыл, әйле, балыҡсы һәм башҡа төньяҡ-көнсығыш һәм көнсығыш башҡорттарына хас генетик билдәләмә булып тора. Был гаплотөркөм генетик сығышы буйынса нәҫелдәштәр булған һинд-европа ҡәүемдәрендә айырыуса йыш осрай. Тикшеренеүсе С.Г. Боталов сюнну-хунну мәҙәниәтен хасил иткән ҡәүемдәрҙең ҡатнаш антропологик (Азия европеоидтары) һәм этнолингвистик (иран-тохар) типҡа ҡарауы хаҡында яҙа. Тарихи процестар барышында был боронғо ҡәүемдәр палеотөркы һөйләштәре хас булған халыҡтар менән тығыҙ этник бәйләнешкә инеп, һуңынан һун этнонимы менән аталып йөрөтөлә башлаған ҡәүәтле этник берләшмәне хасил итә. Тап шуға күрә уртаҡ R1a-M198 гаплотөркөмөнөң төрлө субкладтары Алтай, Тянь-Шань алды, Урта Азия, хәҙерге Ҡаҙағстан, Көньяҡ Урал һәм Волга буйы территорияһында йәшәүсе абориген халыҡтарҙың төп генетик маркеры булып тора. Ошо генетик маркер эйәләре Тарихи Башҡортостан территорияһына көнсығыштан, Себер тарафтарынан трансурал юлы (Мейәс йылғаһы үҙәне буйлап) аша барған миграцион ағым һөҙөмтәһендә килеп инә. Ошо генетик йүнәлешкә хас булған төп маркер хәҙерге Белорет, Иглин, Салауат, Ҡыйғы, Мәсетле, Ҡариҙел, Асҡын районында йәшәүсе башҡорт ырыуҙары вәкилдәренең геногеографияһын билдәләй.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**

**(Аҙағы. Башы 35-36-сы һандарҙа).**

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1858-1860 йылдар** - Ырымбур һәм Һамар генерал-губернаторы Александр Катениндың идара итеү йылдары. Ул эшләгән осорҙа Ырымбур губернаһын Ырымбур һәм Өфө губерналарына бүлеү башлана.

➔ **1858 йыл 14 август** - Ағиҙел йылғаһы буйлап Өфөгә "Грозный" һәм "Быстрый" пароходтары килә. 7 сентябрҙә килгән "Русалка" пароходы Нөгөш тамағына тиклем барып етә. Был Ағиҙелдә суднолар йөрөү мөмкинлеген күрһәтә. 1870 йылда "Ағиҙел" пароходсылығы" йәмғиәте ойошторола. 1871 йылдың яҙынан пассажир пароходтары хәрәкәте башлана.

➔ **1859 йылдың 4 ғинуары** - 1936 йылдың 11 апреле - Бөйөк ғалим, дин эшмәкәре, яҙыусы Ризаитдин бин Фәхретдиновтың ғүмер йылдары.

➔ **1859 йыл** - Ғәрәп графикаһы менән башҡорт телендә тәүге китап - "Батыр батша әкиәте" баҫылып сыға. Ул Ҡазан университеты типографияһында нәшер ителә.

➔ **1859 йыл** - Өфө типографияһында Дини семинария уҡытыусыһы В.М. Черемшанскийҙың "Ырымбур губернаһын хужалыҡ-статистика, этнография һәм сәнәғәт йәһәтенән ҡүҙәтеү" тигән ҙур хеҙмәте баҫылып сыға. Черемшанскийҙың хеҙмәте губернаны төрлө яҡлап комплексы һүрәтләй. Был китап Санкт-Петербургта юғары баһалана һәм алтын миҙал менән бүләкләнә.

**1860 йыл** - Бөрәлә башҡорт ҡыҙҙары өсөн XX разрядлы рус приход училищеһы һәм уның янында ҡатын-ҡыҙҙар пансионаты асыла.

**1860-1864 йылдар** - Ырымбур һәм Һамар генерал-губернаторы Александр Безак идара иткән йылдар. Ул Ырымбурҙа театр эшенә ҙур иғтибар бүлә. Был йылдарҙа Ырымбурҙа халыҡ мәғарифы үҫешә.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**

**(Дауамы бар).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Мәңгелеккә рейд: бер туғандай үтәнеләр изге Ватан ҡушҡанды

8-се атлы корпустың дошман тылына бәреп инеүе уның фронт һыҙығына яҡын булған тыл частарында паника тыуҙыра. Улар, үҙҙәре биләгән пункттарҙы ташлап китеп, Сталино (Донецк) йүнәлешендә тырым-тырағай ҡасыу яғын ҡарай. Немецтар, һуғыш кәрәк-яраҡтарын тимер юл эшелондарына тейәп, көнбайышҡараҡ оҙата башлай.

12 февралдә 112-се кавдивизияға Чернухино районына сығырға бойороҡ бирелә. 313-сө полк марш менән Малониколаевка ауылына етә, бер аҙ ял иткәс, Демченко исемендәге совхозға яҡынлаша. Ошо мәлдә дошмандың 16 самолеты уларҙы бомбаға тота.

Дошмандың "Дон" армиялар төркөмө командующийы, фельдмаршал Манштейн, үҙ ғәскәрҙәренә хәүеф янағынын һиҙенеп, Дебальцево районына өҫтәмә көстәр ебәрә: бында ашығыс рәүештә 62-се, 164-се һәм 304-се пехота дивизиялары, 6-сы танк дивизияһы килтерелә, башҡа айырым тыл частары, авиация йәлеп ителә.

Рейд барышында беҙҙең яугирҙарыбыҙға бик күп ауырлыҡтар аша үтеп сығырға тура килә. Айырым дошман гарнизондары менән бәрелештәр, йыш ҡына бомбаға тотоуҙар ғына етмәгән, фураж һәм аҙыҡ-түлеккә ҡытлыҡ башлана. Шулай ҙа оккупацияла йәшәгән урындағы халыҡ, партизандар уларға ярҙамға килә, мөмкин булғанса фураж менән дә, үҙҙәренең запастарынан аҙыҡ-түлеге менән бүлешә. Корпус Чернухино һәм Дебальцево йүнәлешендә тура юлдарҙан бара алмай, эҙ яҙҙырып, тәрән ҡарлы далалар һәм йырындар аша хәрәкәт итергә мәжбүр була. Командование Чернухино районына разведчиктар ебәрә. Улар Давыдовка хуторында дошмандың артиллерия полкы, бер батальон пехотаһы, ә Чернухинола шулай уҡ байтаҡ ҡына пехота һәм танк полкы булыуын белеп ҡайта. Тимер юл да ҡаты һаҡ аҫтында тотола.

Беҙҙең командирҙар алдағы алышты уңышлы башҡарыу өсөн махсус әҙерлек эштәре алып бара. Өс сабельниктар эскадронынан һәм танкыларға ҡаршы батареянан торған боевой төркөм ойоштоола, уға 294-се полк командиры, подполковник Григорий Фондеранцев үҙе етәкселек итә. Ворошиловград - Дзержинск шоссеһын үткәс, ошо төркөм яугирҙары, дошманды көтмәгәндә атакалап, 38 метр оҙонлоғондағы күперҙе шартлата. Ошо күпер өсөн барған алышта дошман 25 орудиеһын, 24 автомашинаһын, бер нисә йөҙ һалдатын һәм офицерын юғалта. Махсус боевой төркөм Давыдовка совхозы поселогы янына килеп етеп, уның көнбайыш ситендә позиция биләй. Немец гарнизоны һалдаттары, атыша-атыша тораҡ пунктының көнсығыш яғына сигенеп, оборона тоторға әҙерләнә. Комдив Шайморатов 101-се айырым атлы артиллерия дивизионы командиры, капитан Сәйфулла Хәбировҡа, дошман көстәре яҡынлашыу менән, барлыҡ орудиеларҙан ут асырға бойора.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *"Татар булып килгәйнем, башҡорт булып ҡайтам!" - тигән һүҙҙәрҙе ишетергә тура килде. Эйе, архив документтары - хәҡиҡәти яҙмалар, үткәндәрҙең дөрөҫ сағылышы, бер ниндәй сәйәси баҫымһыҙ яҙып ҡалдырылған төплө дәлилдәр.*

# ҺӘР БЕР АРХИВ - ХАЗИНАЛАР

## унда быуаттар ауазы

**Йылдың Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты иғлан иткән Башҡорт тарихы йылы булараҡ үтеүе, бер яҡтан, былтырғы Башҡорт теле йылының үҙенсәлекле дауамы булһа, икенсе яҡтан, алда мөһим сәйәси ваҡиға - Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһы тора. Башҡорт халҡының сал тарихына күҙ һалһаң, унда сәйәсәттең ниндәй урын алыуы, улай ғына ла түгел, кешеләр, милләттәр яҙмышы менән нисек уйнауҙары ап-асыҡ күренә. Кем өсөндөр иҫәп алыу - илдәге йән башын, мал-тыуар, шәхси милек һәм хужалыҡты һанап сығыу ғына булып тойолһа, уның асылында киләсәкте күҙаллау, артабанғы быуындарға үҙебеҙ тураһында дөрөҫ мәғлүмәт һәм аныҡ тарих ҡалдырыуҙың бер мөмкинлеге лә ул. Башҡортостан Республикаһының Милли архивы директоры урынбаҫары, филология фәндәре кандидаты Ниязбай СӘЛИМОВ менән әңгәмәбеҙ ошо хаҡта.**

**Ниязбай Булатбай улы, халыҡ иҫәбен алыу кампанияһына әҙерләнеүҙә архивтарҙың роле ифрат ҙур, тиһәк, һис яңылышмабыҙ, сөнки тап уларҙа күптәр әле аңлап та етмәгән иҫ киткес ҙур байлыҡ тупланған. Шул уҡ ваҡытта, әгәр шул хазинаға юлыҡһаң, ундағы хәҡиҡәтте инҡар итеү бөтөнләй мөмкин түгел. Ошо мөһим сараға әҙерлек осоронда Башҡортостандың төп архив учреждениеһы ниндәй эштәр башҡара?**

- Ысынлап та, һәр бер архив - хазиналар утрауы, унда һаҡланған документтарҙың әһәмиәте йәмғиәт тормошонда баһалап бөткөһөҙ ҙур! Хәҙерге ваҡытта халыҡ араһында алып барылған аңлатыу-мәғрифәтселек эшендә архивтар төп урынды биләй, тип әйтер инем. Совет дәүерендә дәүләт кимәлендә алып барылған сәйәсәт арҡаһында 70 йылдан ашыу үҙенең тарихын онотоорға дусар ителгән халыҡты ҡабат тамырҙарына, асылына ҡайтарыу буйынса эш, йәғни үткәндәрҙәге хаталарҙы төҙәтеү бер көндә генә туҡталмай.

2006 йылда республика Хөкүмәте ҡарары менән Шәжәрә байрамын ойоштороу халыҡтың рухи-мәҙәни әүҙемлеген, үҙенең тамырҙарына ҡыҙыҡһыныуын бермә-бер арттырҙы. Арттырҙы, тим, сөнки уҙған быуаттың 80-90-сы йылдарында ырыуҙар хәрәкәте тергеҙелеп, нәҫел-ырыу тамырҙарын барлау башланғайны инде, әммә был эш менән бары тик энтузиаст зыялылар һәм тыуған яҡты өйрәнеүселәр генә шөғөлләнде. Бәғзеләр иһә архив материалдары менән эшләү тәжрибәһе булмағанлыҡтан, бәлки, был эшкә тотонорға йөрьәт тә итмәгәндер.

Халыҡтың үҙ тамырҙары менән ҡыҙыҡһыныуының артыуын иҫәпкә алып, Башҡортостан Республикаһының Милли архивы ҡарамағында 2017 йылда Шәжәрә үҙәген ойоштороп ебәрҙек. Метрика кенәгәләре ғәрәп яҙмаһында бирелгәнлектән, күптәр шәжәрәһен үҙаллы эшләй алмай. Боронғо документтарҙы иркен уҡый алған белгестәребеҙ был юҫыҡта һәр кемгә булышлыҡ итә. Быға тиклем ике туғандаш милләт араһында "аҙашып" йөрөгән кешеләрҙең, хатта уларҙың балалары һәм ейәндәренең, халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре һәм метрика кенәгәләрен төплө өйрәнеп, оло асыш яһауы - хәҙер инде беҙҙең өсөн ғәҙәти күренеш. Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш райондарындағы һәм Татарстандың көнсығыш төбәгендәге татар булып йөрөгән кешеләр, нәҫел ептәрен тағатып, күп осраҡта үҙҙәренең ҡайһы милләт вәкилдәре икәнлеген асыҡлай. Һуңғы йылдарҙа беҙгә: "Татар булып килгәйнем, башҡорт булып ҡайтам!" - тигән һүҙҙәрҙе күп тапҡыр ишетергә тура килде. Эйе, архив документтары - хәҡиҡәти яҙмалар, үткәндәрҙең дөрөҫ сағылышы! Улар - бер нисә быуат элек үк тарих битенә бер ниндәй сәйәси баҫымһыҙ яҙып ҡалдырылған төплө дәлилдәр.

**Ишетеүемсә, Милли архивта шәжәрә эшләтеү хаҡы бик арзан түгел. Ауыл халҡы өсөн ниндәйҙер ташлама ҡаралмағанмы?**

- Әлегә ташлама юҡ, әммә был тәңгәлдә льгота булдырыу хаҡында уйланабыҙ. Сөнки шәжәрә мәсьәләһе буйынса Милли архивҡа мөрәжәғәт итеүселәр һаны йылдан-йыл арта бара, улар араһында пенсия йәшендәгеләр ҙә байтаҡ. Теге йәки был нәҫелдең тарихын өйрәнеп, уларға ҡағылышлы документтар эҙләү, ғәрәпсә яҙылған метрика кенәгәләрен тикшереп, исем-шәрифтәрҙе табыу, артабан шәжәрә эшләү - былар҆ҙың барыһы ла ҙур көс, ғилем һәм ваҡыт талап итә. Шуға күрә генеалогик хеҙмәт түләүле: нәҫел шәжәрәһен үҙ эсенә алған портфолио рәүешендәге документтар тупланмаһының хаҡы хәҙерге көндә уртаса 20-25 мең һум тәшкил итә. Һүҙ ҙә юҡ, ябай ауыл ғаиләһе өсөн был ҙур аҡса. Әммә теге йәки был юбиляр өсөн магазиндан ҡыйбатлы әйберҙәр алғансы, уға шәжәрә бүләк итеү, беҙҙеңсә, иң отошлоһо! Тимәк, уның балалары, туған-тыумасаһы бергә йыйылышып, шәжәрәгә заказ бирә ала. Ошондай кооперация ысулы менән эш итеүселәр хәҙер күбәйә бара.

Был мәсьәләне хәл итеүҙең йәнә бер юлы бар. Мәғлүм булыуынса, яңыраҡ Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең "Атайсал" тигән яңы проекты эш башланы. Әйтәйек, берәй ауылдағы ҙур ғына нәҫел-ара үҙенең шәжәрәһен эшләтергә ниәт итһә, ул ошо порталға мөрәжәғәт ҡалдырырға мөмкин. Һәр ауылдан сыҡҡан уңышлы эшҡыуарҙар, күренекле шәхестәр бар. Улар бергәләшеп, ауылдаштарына ярҙам ҡулы һуҙа ала. Икенсе яҡтан, ауылда бер кешенең шәжәрәһе эшләнһә, унда күптәр үҙҙәренең нәҫел-нәсәбен таба аласаҡ, сөнки барлай башлаһаң, ауылдың яртыһы тигәндәй нисәнселер быуында туған булып сыға.

Шәжәрә - ул ғаиләнең йылъяҙмаһы ла, ата-бабалар менән бөгөнгө быуынды тоташтырған күпер ҙә, атай менән әсәйҙең үҙ балаларына, ейән-ейәнсәрҙәренә аманаты ла. Быуындар тарихын һәм күсәгилешлеген сағылдырған нәҫел ағасы һәр башҡорт ғаиләһендә булырға тейеш!

**Дөрөҫөн әйткәндә, бөгөн шәжәрәләр һәм аҫабалыҡ грамоталары башҡорттарға үҙ тамырын асыҡлауҙа ҙур ярҙам булып тора, белеүебеҙсә, аҫабалыҡ хоҡуғы башҡа бер милләттә лә булмаған. Башҡорттар ошо ике төшөнсәне һәм рәүиз документтарын мөһим мәғлүмәти сығанаҡ тип баһалай...**

- Ысынлап та шулай, сөнки тарихты күпме генә болғарға тырышмаһындар, хәҡиҡәт барыбер үҙ юлын таба - тарихи документтар төп һәм инҡар ителмәҫлек сығанаҡ булып тора. Был йәһәттән Милли архив менән Тыуған яҡты өйрәнеүселәр йәмғиәтенең "Башархив" сайтын үҙенсәлекле проект тип баһаларға мөмкин. Тарихта беренсе тапҡыр Өфө губернаһының биш - Бәләбәй, Бөрө, Златоуст, Стәрлетамаҡ, Өфө - өйәҙе буйынса 1917 йылғы ауыл хужалығы иҫәбен алыу ваҡытындағы һәр йорт хужалығы буйынса карточкаларҙың электрон күсермәһе менән танышыу мөмкинлеге тыуҙы.

Проектта барлығы 5278 уникаль документ тупланған. Бында шуны билдәләп үтергә кәрәк: 1917 йылғы иҫәп алыу мәғлүмәттәре Рәсәйҙең биш төбәгендә генә һаҡланып ҡалған. Уйлап ҡараһаң, был - тиңе булмаған хазина, сөнки унда хужалыҡ иҫәбе, ғаилә составы, милләт, мал-тыуар һаны һәм төрө, иген культуралары буйынса сәсеүлек майҙандарының күләме, тотош ер майҙаны, ергә эйә булыу формалары, уны ҡуртымға тапшырыу буйынса мәғлүмәт, ер эшкәртеү ҡорамалдары һәм сауҙа нөктәһе булыу-булмауы аныҡ билдәләнгән.

БР Милли архивында шулай уҡ XVIII-XIX быуаттың рәүиз мәғлүмәттәре (ревизские сказки), XIX быуат аҙағы - XX быуат башындағы метрика кенәгәләре буйынса бик күп документтар һаҡлана. Улар нигеҙендә заманса гаджеты булған һәр кем үҙенең шәжәрәһен төҙөп, ғаиләһенең тарихын яҙа ала.

**Һуңғы йылдарҙа Милли архив халыҡ араһында шәжәрә культын тергеҙеү буйынса ысын мәғәнәһендә оло эш башҡара. Мин был осраҡта инде конкурстарҙы күҙҙә тотоп әйтәм.**

- Эйе, тап шулай. Һәр ауылға, һәр ғаиләгә шәжәрә идеяһын еткереү буйынса, ысынлап та, беҙ төрлө ысулдар ҡулланабыҙ. Ижади бәйгеләр ойоштороу - ошо мөһим эштең бер йүнәлеше. Башҡортостандың Милли архивы Архив эштәре буйынса идаралыҡ ярҙамында 2017 йылда Шәжәрә конкурсын башлап ебәргәйне. Быйыл "Минең ғаиләм тарихы - архив документтарында" тигән IV республика асыҡ фәнни-тикшеренеү конкурсын иғлан иттек. Ул 25 ғинуарҙан 31 апрелгә тиклем барҙы. Ижади бәйге тарихи тамырҙарын асыҡларға, нәҫел-нәсәбен барларға һәм ғаилә шәжәрәһен эшләргә теләге булған 8-11-се класс уҡыусылары, колледж, юғары уҡыу йорттары студенттары һәм 30 йәшкә тиклемге йәштәр араһында өс номинация буйынса уҙғарыла. Шәжәрә конкурстарында йылдан-йыл ҡатнашыусылар һаны арта бара, республика райондары һәм ҡалаларынан ғына түгел, Силәбе, Һамар, Ырымбур, Түбәнге Новгород өлкәләренән дә байтаҡ эштәр килде. Иң мөһиме - халҡыбыҙҙың милли бренды булараҡ баһаланырға тейешле шәжәрә хәҙерге заман йәштәренең милли ғорурлығы һәм ата-бабалар мираҫын ҡәҙерләп һаҡлауҙың сағыу өлгөһө булып ҡалһын ине, тигән теләктәбеҙ.

**Башҡортостан Республикаһының Архив эштәре буйынса идаралығы һәм Милли архивының тағы ла бер мөһим проектын билдәләп үтмәй булмай: ул да булһа - илдәге, бигерәк тә республикалағы халыҡ иҫәбен алыу документтары урын алған күсмә күргәҙмә. Ошо хаҡта ла һөйләп китегеҙ әле.**

- Күсмә күргәҙмәне кисә-бөгөн генә башламаныҡ. Төрлө райондарҙа һәм ойошмаларҙа, шулай уҡ Өфөнөң мәҙәни усаҡтарында төрлө сәйәси-ижтимағи ваҡиғалар айҡанлы тематик күргәҙмәләрҙе электән ойоштороп киләбеҙ. Былтыр сентябрҙә Милли архивтың төп корпусында "Башҡортостанстат" идаралығы вәкилдәре ҡатнашлығында Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың 100 йыллығына арнап, ҙур күргәҙмә уҙғарғайныҡ. Уларҙа рәүиз мәғлүмәттәре, метрика кенәгәләре, устав грамоталары, шәжәрәләр күрһәтелде. Был документтар менән ҡыҙыҡһыныусыларҙың күп булыуын иҫәпкә алып, үткән йылдың декабрендә күсмә күргәҙмә ойошторорға ҡарар иттек һәм "Башҡортостанда халыҡ иҫәбен алыу тарихынан" тигән үҙенсәлекле проектты башлап та ебәрҙек. "Тау Мөхәммәткә килмәһә, Мөхәммәт тауға үҙе бара" тип юҡҡа әйтмәгәндәр бит. Һәр кемдең архивҡа килергә ваҡыты йәки мөмкинлеге юҡ икән, архив үҙе кешеләр янына бара ала!

Баш ҡалабыҙҙа ойошторолған күсмә күргәҙмә тәүҙә "Ҡунаҡһа-



рай"ҙа "ҡунаҡ" булһа, артабан уны "Башкирия" лайфстайл үҙәге һәм "Мега", "Планета" сауҙа-күңел асыу үҙәктәре ҡабул итте. Февралдә иһә күргәҙмә менән Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты студенттары танышты. Ҡыҙыҡлы документтар менән яҡындан танышыу мөмкинлегенә Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты уҡыусылары эйә булды. Артабан күргәҙмә марафоны Башҡорт дәүләт медицина университеты, М. Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университеты һәм башҡа юғары уҡыу йорттарына юлланды.

Күргәҙмәләге боронғо документтар, шәжәрә өлгөләре һәм сенсор өҫтәлендә урынлаштырылған 1917 йылғы иҫәп алыу мәғлүмәттәре халыҡта, шул иҫәптән йәштәрҙә, ҙур ҡыҙыҡһыныу уята. Күптәр был документтарҙы тәүгә күрә, үҙҙәре өсөн яңы серле донъя аса. Экспозиция эргәһендә һәр ваҡыт архив хеҙмәткәрҙәре һәм иреклмәндәр эшләй, улар экскурсанттарҙың барлыҡ һорауҙарына төплө яуап бирә.

Бынан тыш, Архив эштәре буйынса идаралыҡ һәм Милли архив сайттарында, шулай уҡ социаль селтәрҙәрҙә виртуаль күргәҙмәләребеҙ ҙә бар.

Ҡыҫҡаһы, республикабыҙҙың төп архив ойошмаһы заман менән бергә атларға һәм йәниҫәп документтарын, шәжәрә эшләү өсөн кәрәкле метрика кенәгәләрен, рәүиз мәғлүмәттәрен төрлө ысулдар менән популярлаштырырға тырыша. Асылда, нәҡ ошо документтар кешеләрҙең милли асылына юл аса, ата-бабаларының кем икәнлеген,

Хәҙер күптәр өйҙәрендә йәки беҙҙең уҡыу залдарында ултырып ҡына, боронғо яҙмалар менән таныша ала.

Хеҙмәт стажын, эш хаҡының күләмен билдәләү, шулай уҡ судта исем-шәрифтәре һәм ер биләмәләренең дөрөҫлөгөн иҫбатлау кеүек донъяуи мәсьәләләр буйынса архивҡа көн һайын бик күп кеше мөрәжәғәт итә.

Милли архив, Пенсия фонды һәм МФЦ менән электрон хеҙмәттәшлек урынлаштырып, халыҡ мөрәжәғәттәренә тиҙ арала яуап биреүгә өлгәшә. Мәҫәлән, һуңғы йылдарҙа ғына архив хеҙмәткәрҙәре тарафынан уртаса 35-40 мең самаһы социаль-хоҡуҡи мөрәжәғәткә төплө яуаптар әҙерләп ебәрелде.

Нәҫел тамырҙарын юллау буйынса халыҡҡа ярҙам күрһәтеү маҡсатында Шәжәрә үҙәген ойоштороу, матур йолаға әүерелгән ғилми-тикшеренеү конкурстарын үткәреү, стационар, күсмә һәм виртуаль күргәҙмәләр ойоштороу, архив хеҙмәткәрҙәренең төрлө тарихи темалар, күренекле шәхестәр тураһында киң мәғлүмәт сараларында даими сығыш яһауы, Рәсәйҙең төрлө төбәктәрендә, шулай уҡ республикабыҙҙа үткәрелгән ғилми-ғәмәли конференцияларҙа әүҙем ҡатнашыу - быларҙың барыһы ла халыҡ менән архив араһын яҡынайтыуға, бихисап архив документын фәнни әйләнешкә индереүгә булышлыҡ итә. Милли архивтың киң ҡоласлы эшмәкәрлегендәге был йүнәлештәр артабан да һаҡланасаҡ.

Бөгөн Милли архив заман технологияларын иркен файҙалана. Был йәһәттән төп архив ойошмаһын яңы архив һаҡлағыстар, ҡеүәтле сканерҙар һәм

# УТРАУЫ,

## тауыш бирә

ниндәй милләттән булыуын асыҡларға ярҙам итә. Ҡыҫҡаһы, БР Милли архивы, төрлө йүнәлештә халыҡҡа социаль-рухи хеҙмәттәр күрһәтеп, Бөтә Рәсәй йәниҫәп алыу кампанияһы алдынан ғәйәт оло эш башҡара.

**Башҡортостан Республикаһының Милли архивы киләсәккә ниндәй пландар һәм маҡсаттар менән йәшәй?**

- Архивтарҙың төп бурысы - быуаттар ауазын беҙҙең көндәргәсә еткергән документаль мираҫты тейешенсә һаҡлауҙы тәьмин итеп, уны киләһе быуындарға еткереү, фондтарҙы тулыландырыу өсөн предприятие-ойошмаларҙан яңы документтар ҡабул итеү, халыҡҡа социаль-хоҡуҡи хеҙмәттәр күрһәтеү. Йәмғиәт өсөн мөһим был эшмәкәрлек киләсәктә лә даими алып барыласаҡ. Әлбиттә, заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, бөгөн беҙ архив документтарын электрон рәүешкә күсереү буйынса бик әүҙем шөғөлләнәбеҙ.

башҡа ҡорамалдар менән тәьмин иткән Башҡортостан Хөкүмәтенә бик тә рәхмәтлебеҙ. Бик күп сер һаҡлаған метрика кенәгәләрен, рәүиз мәғлүмәттәрен һәм башҡа боронғо документтарҙы тиҙ арала электрон рәүешкә күсереүҙе теүәлләү - алда торған иң ҙур бурыстарыбыҙҙың береһе. Республика етәкселегенең Милли архивҡа тос ярҙамы беҙгә бер нисә йыл эсендә Башҡортостан Республикаһы Архив фондының берҙәм мәғлүмәти системаһын булдырыу, "Эш" электрон документ әйләнешен тулыһынса яйға һалыу һәм, "Электрон архив" базаһын тулыландырып, ундағы документтарҙы интернет аша халыҡҡа еткереү кеүек үтә мөһим бурыстарҙы уңышлы атҡарып сығырға мөмкинлек бирәсәк.

Бай тарихлы Рәсәй һәм Башҡортостан архивтары элек-электән дәүләт һәм халыҡ ихтыяжына хеҙмәт иткән, киләсәктә лә ошо изге һәм яуаплы бурыс уларҙың төп йүнәлеше булып ҡаласаҡ.

**Зәйтүнә НИҒМӘТЙӘНОВА әңгәмәләште.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# КЕМДӘР УЛАР МИШӘРҘӘР?



**Балтас районында өр-яңы тарихи-мәҙәни үҙәк асыла. Маҡсаты бер - Башҡортостан мишәрҙәренең мәҙәни ҡиммәттәрен өйрәнеү, тергеҙеү һәм һаҡлау. Әйткәндәй, был төбәктә етмештән ашыу ауыл бар, уларҙың 14-дә мишәрҙәр көн итә, тип раҫлай әңгәмәсебеҙ.**

Ә кемдәр һуң ул мишәрҙәр? Башҡорттарҙан һәм татарҙарҙан айырмалыҡтары нимәлә? Ҡайҙа йәшәйҙәр? Был хаҡта яңы үҙәктең баш белгесе Айҙар Сираев һөйләне.

- Тарихтан мәғлүм булыуынса, 1812 йылда мишәрҙәрҙең башҡорт-мишәр полкы составында Парижғаса барғаны билдәле. Был полк 1798 йылдар тирәһендә ойошторолған. 1920 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса, төбәктә 166 мең самаһы мишәр теркәлгән. Ә 1926 йылдағы халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәре буйынса республика биләмәһендә 136 мең самаһы мишәр йәшәгән. 1939 йылдағы иҫәп буйынса иһә мишәрҙәр бөтөнләй теркәлмәгән. Нисек былай килеп сыҡҡан һуң? Белеүебеҙсә, был тарихи осорҙа Татарстан, Башҡортостан республикалары формалашыуҙы дауам иткән, шуға ла, бәғзе белгестәр билдәләүенсә, мишәрҙәрҙең теле татар теленә яҡын булыу сәбәпле, уларға тап ошо милләт вәкиле тип яҙылыу тәҡдим ителгән.

"Мишәр" һүҙенең тарихы тәрән, бер фараз буйынса ул "мадьяр", "маджар" һүҙҙәренә барып тоташа. Был халыҡ яугир булмышлы, ҡыйыу булған, мишәрҙәр - уларҙың тоҡомдары, тиҙәр. Икенсе фараз буйынса, Пенза, Түбәнге Новгород тарафтарында Мещера тигән төбәк булған. Батша власы был тарафтарҙан Рәсәй сиктәренә күсергән кешеләрҙе "мишәрҙәр" тип атаған. Был халыҡ батшаға бик тоғро булған.

Күптән түгел "Башҡортостан мишәрҙәре" тигән йыйынтыҡ донъя күргән. Авторҙары - тарихсылар Салауат Хәмиҙуллин, Азат Ярмуллин. Бында дәһшәтле осорҙа Башҡорт автономияһы өсөн көрәшкән билдәле мишәрҙәр тураһында мәғлүмәттәр һәм башҡа тарихи материалдар бар, - ти Айҙар Сираев.

Ул мишәрҙәрҙең милли аштары тураһында ла телгә ала. Мәҫәлән, "майаш" тигән тәмлекәстәр беҙ күнеккән бауырһаҡтан бөләкәйерәк, ә сөк-сәктән ҙурыраҡ итеп яһала. Балан ҡатығы ла - үҙенсәлекле эсемлек. Уны эшләү өсөн баланды оҙаҡ ҡына ҡайнаталар һәм он менән ҡуйыртып, шәкәр ҡушып, татлы эсемлек яһайҙар. "Был - Балтас бренды. Баланды беҙҙә "малан" тиҙәр. Бындай эсемлекте бер ҡайҙа ла осратмаҫһығыҙ", - ти Айҙар Сираев.

Мишәр теленә килгәндә, Айҙар Сираев әйтеүенсә, улар "яңғырап торған "ч" хәрефе менән һөйләшә.

Әлеге ваҡытта мишәр ауылдары Борай, Ҡариҙел, Кушнаренко, Дәүләкән, Саҡмағош һәм башҡа райондарҙа урынлашҡан. Рәсәйҙә иһә улар Силәбе өлкәһендә, Сыуашстанда, Себерҙә һәм башҡа төбәктәрҙә таралған.

"Күңелебеҙҙә мишәр тигән үҙбилдәләнеш йәшәй. Был беҙҙең өсөн бик мөһим. Яңы асылған тарихи-мәҙәни үҙәктең маҡсаты - тарихыбыҙҙы асыҡларға, күберәк мәғлүмәт тупларға, милләтебеҙҙең вәкилдәрен берләштерергә. Ошо көндәрҙә ул рәсми асыласаҡ", - ти Айҙар Сираев.

# ГЕНЕРАЛДЫҢ ТЫУҒАН АУЫЛЫНДА



**Благовар районында мөһим һәм иҫтәлекле ваҡиға булды - унда данлыҡлы яҡташыбыҙ, күренекле дәүләт эшмәкәре, Башҡорт автономияһын төҙөүгә тос өлөш индергән башҡорт генералы Хажиәхмәт Исхаҡ улы Ишбулатовтың тыуыуына 170 йыл тулыуға арналған шәжәрә байрамы, фәнни-ғәмәли конференция үтте.**

Мәғлүм булыуынса, генерал Хажиәхмәт Ишбулатов Беренсе донъя һуғышында ҡатнашҡан. Ул 1915 йылда 146-сы хәрби батальондың, 1916 йылда 152-се запастағы полктың командиры булып хеҙмәт иткән. 1917 йылғы Октябрь революцияһы менән бергә Башҡорт автономиялы республикаһы төҙөлгәс, 1918 йылда Башҡорт корпусының командиры булып торған.

Сара батырҙың тыуған еренән - Өйҙәрәкбаш ауылынан башланды. Унда генерал-лейтенант Хажиәхмәт Ишбулатовтың бюсына сәскәләр һалынды.

Бюст 2018 йылда асылған. Бығаса Благовар районы башҡорттары урындағы Ҡәнзәфәр бей исемендәге башҡорт тарихи-мәҙәни үҙәге менән берлектә генерал Хажиәхмәт Ишбулатовҡа һәйкәл асырға тип төрлө даирәләргә мөрәжәғәт иткән. Ниһайәт, Башҡортостандың 100 йыллығын билдәләгән осорҙа был бәрәкәтле ерҙә күренекле дәүләт һәм хәрби эшмәкәр Хажиәхмәт Ишбулатовҡа һәйкәл барлыҡҡа килгән. Билдәле булыуынса, бюст халыҡ йыйған аҡсаға эшләнгән. Авторы - ошо ауылда тыуып үҫкән скульптор Рәфис Зәйнетдинов. Һәйкәл генералдың һаҡланып ҡалған берҙән-бер фотоһы буйынса ҡойолған.

Артабан сара Языково ауылында, район мәҙәниәт йортонда дауам итте. Фойела урындағы әүҙемселәр, тамырҙары менән төптән ҡыҙыҡһыныусылар шәжәрәләр күргәҙмәһе ойошторғайны. Кешеләрҙең быуындары тарихы, тамырҙары менән төплө ҡыҙыҡһынғаны күренеп тора: шәжәрәләр бай, күп яҡлы һәм ихлас эшләнгән. Һис шикһеҙ, барыһында ла данлыҡлы генералдың шәжәрәһе ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы - ул киң һәм мәғлүмәтле нәҫел документы булып тора.

Фәнни-ғәмәли конференция барышында йыйылыусылар Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Ғәлим Яҡуповтың, БР Стратегик тикшеренеүҙәр институтының Граждандар башланғыстарын өйрәнеү үҙәге баш ғилми хеҙмәткәре Рәфил Аҫылғужиндың, Башҡорт дәүләт университеты доценты, филология фәндәре кандидаты Искәндәр Сайетбатталовтың сығыштарын тыңланы. Сарала данлыҡлы генералдың тоҡомдары - Өйҙәрәкбаш ауылында йәшәүсе Зәйнәб Ишбулатова һәм "Ағиҙел-Инвест" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры Филүс Ишбулатов та ҡатнашҡайны. Филүс Хәмит улы - Өфө ҡала Советы депутаты, ул баш ҡала урамдарының береһенә арҙаҡлы милләттәшебеҙ Хажиәхмәт Ишбулатовтың исемен биреү башланғысын тәҡдим итеүсе лә.

Зәйнәб Ишбулатова генералдың данлыҡлы исеме тыуған яғына оҙон йылдар аша әйләнеп ҡайтыуы хаҡында һөйләне. "Уҙған быуаттың 30-сы йылдарында Ишбулатовтарҙың күбеһе репрессияларға эләккән. Шуға ла уның менән туғанлыҡ ептәре бәйләүе тураһында, бәлки, күптәр өндәшмәүҙе хуп күргәндәр. Йылдар үтте һәм, ниһайәт, тарихи ғәҙеллек тантана итте. Минең атайым, 37 йыл ауылыбыҙ мәктәбендә уҡытыусы булып эшләгән Хәтмулла Ишбулатов данлыҡлы генерал хаҡында мәғлүмәттәрҙе үткән быуаттың 80-се йылдарында уҡ йыя башлағайны. Яҙмыш уны осраҡлы ғына Хажиәхмәт Ишбулатовтың өлкән улы Сәйетгәрәйҙең ҡатыны Татьяна Никитична менән осраштырған. Ҡатын ғаилә тарихы, генералдың балалары хаҡына һөйләгән. Бына шулай генерал хаҡында тәүге мәғлүмәттәр барлыҡҡа килгән, әйткәндәй, ошо сәйәхәттән атайым уның берҙән-бер фотоһын да алып ҡайтҡан", - тип һөйләне Зәйнәб Хәтмулла ҡыҙы.

Фәнни -ғәмәли конференция һөҙөмтәләре буйынса Языково ауылына ингән урында Х. Ишбулатовҡа бағышланған мәғлүмәти стенд (баннер) ҡуйырға, был ауылда бер урамға генералдың исемен бирергә, мәктәп уҡыусылары араһында "Ишбулатов уҡыуҙары" үткәрергә ҡарар ителде.

**Гүзәлиә БАЛТАБАЕВА.**

*✓ Театрҙың 90 йыл эшләү дәүерендә йөҙәрләгән спектакль сәхнәләштерелгән. Бөгөн дә балалар гаджеттар, интернет менән нығыраҡ дуҫ булһа ла, ололар уларға ҡурсаҡ театрының мөғжизәле донъяһын күрһәтһен ине.*



СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫНДА

# ҠУРСАҠ ТЕАТРЫНДА ҒЫНА...

## ысын мөғжизә, ысын әкиәт йәшәй



**Кескәй тамашасыларында сәнғәткә һөйөү тәрбиәләгән һәм уларҙың күңелдәренә яҡшылыҡ, изгелек, кешелеклек кеүек мөһим орлоҡтар һалыусы, барыһын да мөғжизәгә ышандырған Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры яңы 90-сы юбилей миҙгелен асты. Ошо уңайҙан театр директоры Альберт ИМАМЕТДИНОВ менән әңгәмәләштек.**



**➔ 90-сы юбилей миҙгелендә театр коллективын һәм тамашасыларын ниндәй үҙгәрештәр көтә?**

- Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры 90-сы юбилей миҙгелен бик ашҡынып көтөп алды һәм пландарыбыҙ бик күп. Улар башлыса театр бинаһын яңыртыуға, ҙур төҙөлөшкә бәйле, әлбиттә. Сөнки ул ваҡытта театр ҙураясаҡ, беҙҙә Бәләкәй зал, ҡәһүәхана, ҡурсаҡтар музейы, балалар өсөн оҫтаханалар, тышҡы территорияла уйын майҙансыҡтары һәм башҡа заманса уңайлыҡтар булдырыласаҡ. Былар беҙҙең ижади тормошҡа яңы һулыш алып килер, тип ҙур өмөттәр бағлап көтәбеҙ.

Ә инде коллектив эшенә һәм репертуарға килгәндә, тырышып, бик әүҙем эшләйбеҙ. Бер нисә йыл рәттән "Кесе Ватан мәҙәниәте" федераль проектында ҡатнашып, гастролдәргә йөрөү өсөн уңайлы өс автобус алыуға өлгәштек. Театр яңыртылған осорҙа башҡа бинаға күсеп эшләргә, күберәк республиканың район-ҡалаларына гастролдәргә йөрөргә махсус бәләкәйерәк спектаклдәр әҙерләнек. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, алты йыл элек бында директор булып эш башлағанда иҫке генә "пазик"тан башҡа транспортыбыҙ юҡ ине, шуға саҡырған ергә лә бара алмай интегеп, башҡа театрҙарҙан транспорт һорарға тура килә ине. Шунда театрға реконструкция эшләп, транспорт алып, матди-техник базаны төрлө яҡтан яҡшыртып, яңы һулыш бирәм, тип үҙемә һүҙ биргәйнем. Шуға бөтә көсөмдө, белемемде ошо Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрын аяҡҡа баҫтырыуға һалам, республикабыҙҙың данлыҡлы бер театры итеп үҫтереп, данын арттырырға тигән маҡсат менән йәшәйем.

Театрҙы матди-техник йәһәттән яңыртыуҙан тыш, юбилей миҙгелендә тамашасыларыбыҙҙы өр-яңы сағыу спектаклдәр менән дә ҡыуандырырға ниәтләйбеҙ. Бына 4-се сентябрҙә Корней Чуковскийҙың әҫәрҙәре буйынса эшләнгән "Приключения Доктора Айболита и его друзей" тип аталған спектаклдең премьераһы булды. Сәхнәләштереүсе төркөмдә ҡуйыусы режиссер Башҡортостандың халыҡ артисы Ольга Шәрәфетдинова, рәссам Наталья Бирюкова, хореограф Рөстәм Имамов, музыкаль яҡтан биҙәүсе Эдуард Исламов эшләне. Был спектакль беҙҙең театр өсөн бик үк традицион булмаған клоунада формаһында, шуның менән дә үҙенсәлекле ул. Режиссер Чуковскийҙың әҫәрҙәре менән танышҡандан һуң, ошо стилдә эшләргә тәҡдим иткәс, худсовет ризалыҡ биреп, июнь-июль айҙарында эш башлағайныҡ. Ниһайәт, отпускынан һуң әҙерләп бөтөп, яңы ғына үҙебеҙ ҡараныҡ һәм бик ҡәнәғәт ҡалдыҡ. Спектакль ысынлап та бик матур килеп сыҡҡан, ул музыкаль яҡтан бай, костюмдар сағыу, артистар клоунада жанрын үҙләштереп, һөнәрҙәрен арттырған, пластика, бейеүҙәр, көлкө, тамашасылар менән йәнле аралашыу - барыһы ла бар. Спектаклдең йәш арауығын 0+ тип билдәләнек, уны бөтә тамашасыларға ла ҡарарға була. Иң кескәйҙәргә лә ҡыҙыҡ буласаҡ, ололар ҙа моңһоу көҙ миҙгелендә беҙҙең тамашанан йылы тәьҫораттар алып, театрҙан күтәренке кәйеф менән ҡайтыр, тип ышанабыҙ.

Ғөмүмән, коллективыбыҙ менән йыл һайын алты яңы спектакль сәхнәләштерәбеҙ, тигән маҡсат ҡуйғанбыҙ. Быны төҙөлөш барғанда ла дауам итергә ниәтләйбеҙ һәм әле "Кошкин дом" тигән спектакль өҫтөндә эшләйбеҙ, артабан "Незнайка и его друзья" көтә. Башҡортса спектакль ҡарарға теләгән тамашасыларыбыҙҙы ла иғтибарҙан ситтә ҡалдырмайбыҙ: яҙға табан әҙерләргә ниәтләйбеҙ, әлегә атамаһын тәҡдим итәләр, эш башланып ҡына тора. Уны ғинуар айында төҙөкләндереү башланғас, икенсе бинаға күсеп урынлашҡас, бойомға ашырырбыҙ.

**➔ Ғәҙәттә, театрҙар яңы миҙгелде йәш артистарҙы эшкә алып ҡаршылай. Һеҙҙең коллектив яңырамы?**

- Бүтән театрҙар менән ярышырлыҡ әмәлебеҙ юҡ, артистар эшкә ынтылып килә, тип әйтә алмайым. Сөнки аңлап тораһығыҙ, мөмкинлектәребеҙ самалыраҡ, артистарға урын тарыраҡ, гримеркаларҙа ла ҡыҫылыбыраҡ ултыралар, шундай хәл ителәһе ҡайһы бер мәсьәләләр бар. Шулай ҙа быйыл коллективыбыҙ ике йәш кеше менән тулыланды, беҙгә З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтының театр факультетында махсус ҡурсаҡ театры артистары әҙерләгән курста белем алып йөрөгән йәштәр Айнур Мәҡсүтов һәм Шамил Харрасов килде. Был курста йәмғеһе 7 егет һәм ҡыҙҙар уҡый, төҙөкләндереү эштәре тамамланыуға барыһы ла беҙҙең сафтарға инер, тип ышанабыҙ. Әйткәндәй, "Приключения Доктора Айболита и его друзей" спектаклендә йәш артистарыбыҙҙың дебюты булды.

**➔ Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының 90 йыллыҡ тарихында тулы тамаша залдары йыйған спектаклдәр ҙә барҙыр. Уларҙы был миҙгелдә тергеҙеп, тамашасыларҙы үткәндәргә сәйәхәт иттерергә ниәтегеҙ юҡмы?**

- Ҡыҙғаныҫҡа күрә, күп спектаклдәр ваҡыт үтеү менән матди яҡтан юғалтыуҙар кисергән. Театрҙың күп тамашалары ҡурсаҡтар, маскалар ярҙамында сәхнәләштерелгән һәм улар иҫкергән, күптәрен һаҡлау өсөн бик һаҡ ҡағылырға кәрәк. Шуға тарихи спектаклдәребеҙҙе тиҙ генә тергеҙеп, тамашасыларҙың бала саҡ хәтирәләрен яңыртыу, уларҙы шул осорҙоң тылсымлы әкиәт донъяһына илтер өсөн күп көс талап ителә.

Шулай ҙа беҙ бер нисә йыл элек театрыбыҙҙың Алтын фондына ингән "Һинд легендаһы" тигән спектаклде яңынан сәхнәгә күтәреүгә өлгәштек. Был сағыу әҫәр үткән быуаттың 80-се йылдарында режиссер Петр Мельниченко тарафынан сәхнәләштерелгән. Заманында спектакль СССР-ҙың Һиндостанға гастролдәре өсөн тәғәйенләнгән булған һәм айҙан ашыу илдең төрлө ҡалаларында сығыш яһап, театрҙың коллективы Джавахарлал Неру исемендәге премия алып ҡайтҡан. Бындай юғары наградаға Рәсәйҙә башҡа бер ҡурсаҡ театры ла лайыҡ булмаған. Әле лә Һиндостандан килгән ҡунаҡтар йыш ҡына шул "Һинд легендаһы"н иҫләп, беҙгә тамашаға килә. Беҙ был тарихи спектаклде ваҡыты-ваҡыты менән уйнайбыҙ, замандаш тамашасыларыбыҙ ҙа бик йылы ҡабул итә. Ә башҡа спектаклдәргә килгәндә, әле ҡәҙерләп кенә һаҡлап килгән ҡурсаҡтарҙы, кейемдәрҙе һәм башҡа әйберҙәрҙе театр бинаһы яңыртылғандан һуң махсус музейға урынлаштырырға уйлайбыҙ.

**➔ Тамашасыларығыҙға әйтергә теләгән һүҙҙәрегеҙ ниндәй булыр?**

- Ысын әкиәт, мөғжизә ҡурсаҡ театрында ғына йәшәй. Бында балаларҙы һәм үҙенең һөнәрен яратҡан, эшенә тоғро кешеләр хеҙмәт итә. Бөтә күңелебеҙ менән бирелеп, барлыҡ оҫталығыбыҙҙы һалып, һәр тамашасының күңеленә үтерлек итеп эшләргә тырышабыҙ. Театрҙың 90 йыл эшләү дәүерендә йөҙәрләгән спектакль сәхнәләштерелгән һәм уларҙы ҡараған кескәй тамашасыларыбыҙҙың ҙур сәнғәткә юлы ошо тупһанан башланған. Бөгөн дә балалар гаджеттар, интернет менән нығыраҡ дуҫ булһа ла, ололар уларға ҡурсаҡ театрының мөғжизәле донъяһын күрһәтһен ине. Бында йәнле аралашыу, баланың күңелен үҫтереү, кешелеклек, рухи тәрбиә биреү кеүек етди мәсьәләләрҙә коллективыбыҙ күп көс һала.

Әйткәндәй, быйыл сентябрь айынан Рәсәй Хөкүмәте тарафынан булдырылған "Пушкин картаһы" тип аталған яңы проектҡа ҡушылдыҡ. Был проект шунан ғибәрәт: 14-тән 22 йәшкә тиклемгеләр "Дәүләт хеҙмәттәре" порталы аша үҙенә электрон форматта "Пушкин картаһы"н теркәргә тейеш һәм уларға быйыл декабрь аҙағына тиклем тотоноуға 3 мең һум аҡса бүленә. Сумманы йәштәр театр, музей, филармонияларға йөрөүгә сарыф итә ала. Был үҫмерҙәр, студенттар, йәш ғаиләләр өсөн ҙур бүләк, минеңсә. Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры ошо йәштәгеләр өсөн ең һыҙғанып репертуар әҙерләне һәм сентябрь айында күп кенә тамашаларыбыҙ нәҡ уларға тәғәйен буласаҡ. Барлыҡ тамашасыларҙы ла беҙҙең сағыу донъябыҙға саҡырып ҡалам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры 90-сы юбилей миҙгелен бына шулай дәрт-дарманы ташып, киләсәккә ҙур пландар менән башлап тора. Театрҙың йыл да репертуары сағыу, фәһемле спектаклдәр менән тулыланып тороуына күнегеп тә бөткәнбеҙ, тиерлек. Ә бына уның бинаһы яңыртылыуы һәм заманса төҫ алыуы, коллективтың иһә Башҡортостан буйлап гастролдәргә сығыуы бик ҡыуаныслы. Тимәк, быйыл баш ҡала халҡы ғына түгел, республиканың ҡала-ауылдарында йәшәгән кескәйҙәр һәм ололар ҙа әкиәт иленә сәйәхәт итә алыр.**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛАН ҺИМЕҘМЕ?

■ Рәсәйҙә һимеҙлек менән яфаланыусы балалар проблемаһы, мәҫәлән, Америка Ҡушма Штаттары менән сағыштырғанда, ул тиклем киҫкен тормай. АҠШ-та балаларҙың 20 процентына, ә өлкән йәштәге кешеләрҙең өстән бер өлөшөнә ҡуйыла бындай диагноз. Балаларҙың һимеҙлеге - йөрәк, яман шеш һәм башҡа сирҙәр һөҙөмтәһендә тыуа, социаль һәм эмоциональ сәбәптәр тураһында әйтеп тораһы ла түгел. Белгестәр әйтеүенсә, бөгөнгө йәштәр ата-әсәләренән алда үлгән тәүге быуын булыуға дәғүә итә. Күптән түгел "Педиатрия" журналында яңы тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе баҫылды. Белгестәр балаларға ризыҡты бәләкәй тарелкаларға һалып бирергә тәҡдим итә. Филадельфия мәктәбенең беренсе класс уҡыусыларына ҙур һәм бәләкәй тарелкалар тәҡдим иткәндәр, улар унда аҙыҡты үҙҙәре һалып алған. Ҙурыраҡ тәрилкәне һайлаусылар күберәк ашауы асыҡланған. Бының менән һимеҙлекте дауалап булмай, шулай ҙа тәҡдим ителгән ысул был йүнәлештә тәүге аҙым, ти ғалимдар.

■ Виноград емеше генә түгел, һөйәге лә файҙалы. Ул Альцгеймер ауырыуына аҙырға мөмкинлек бирмәй. Баш мейеһе кластерҙарында олигомер тип йөрөтөлгән бета-аҡһымдар йыйылыуы һөҙөмтәһендә килеп тыуған был сир бик хәүефле, ул хәтер насарайыуына килтерә. Виноград экстракты ошоно булдырмай ҙа инде. Хатта оҙайлы рәүештә виноград һөйәге майы ҡабул итеү артыҡ бета-аҡһымды сығарыуға булышлыҡ итә. Көнөнә 150-250 мг виноград һөйәге экстракты ҡабул итергә йәки ҡыҙыл виноград ашарға кәрәк. Табиптар Альцгеймер сирен иҫкәртеү өсөн башҡа тәбиғи матдәләр, витамин һәм минералдар ҡабул итергә ҡуша. Күп кенә йәшелсә, емеш-еләк баш мейеһендә барған үҙгәрештәрҙе туҡтата ала. Куркумин, башҡа тәмләткестәр гомоцистеин кимәлен түбәнәйтә.

